*✓ Ата-әсәгеҙҙән һуң туғандарығыҙ - иң яҡын кешеләр. Шуның өсөн улар менән һәр ваҡыт әҙәпле һәм мәрхәмәтле булығыҙ. Уларҙың ололарын ата-әсә кеүек иҫәпләп һөйләшегеҙ, итағәтле ғәмәл итегеҙ. Кеселәренә шәфҡәтле булығыҙ, уларҙы һис рәнйетмәгеҙ һәм ҡаты күңелле булмағыҙ.*

***РИЗАИТДИН нәсихәттәре.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

19 -25 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2009 ЙЫЛ

№38 (352)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Страус үҫтер - ите тәмле, табышлы ла үҙе



5

Мөжәүир хәзрәт - башҡорттоң бөйөк әүлиәһе



7

Бер юғары уҡыу йорто... милләттең тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә аламы?





8-9

Ялландым бары халҡыма

Йән хеҙмәтсеһе булып



10-11

ТВ программа

14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡала мөхитендә ейән-ейәнсәрҙәрегеҙҙе милли рухта тәрбиәләй алаһығыҙмы?

*Клара СИРАЖЕТДИНОВА, өләсәй:*

- Минең 8 ейән- ейәнсәрем бар, Аллаға шөкөр, барыһын да ысын башҡорт рухында үҫтерә алыуға өлгәштек, тип иҫәпләй алам. Иң бәләкәйҙәре, оло улым Зиннурҙың игеҙәктәре - Камилә менән Аҫҡар быйыл М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейына беренсе класҡа уҡырға барҙы. Уларҙы ла саф башҡортса тәрбиәләргә тырыштыҡ. Иң тәүге шарт - улар менән өйҙә тик башҡортса ғына һөйләштек. Урыҫ балалар баҡсаһына йөрөһәләр ҙә, уларҙы тәрбиәселәре гел генә маҡтап, өлгө итеп ҡуйыр булды. Ни өсөн, тиһегеҙме? Ошо балалар баҡсаһына башҡорт милли кейемдәрен кейеп, үҙ телебеҙҙә шиғырҙар һөйләп, йырлап-бейеп йөрөнө улар. Һис бер кемдән оялманылар ҙа, ятһынманылар ҙа бәләкәстәребеҙ. Бындай балалар һирәк бит ул, нисек тәрбиәләйһегеҙ уларҙы, тип кенә тора инеләр. Иптәшем Әмир Сиражетдинов менән өс балабыҙҙы ла ата-бабалар рухында тәрбиәләй алғас, беҙгә ейәндәребеҙҙе лә урыҫ мөхитенең кире йоғонтоһонан йолоп ҡалыу ауыр булманы. Уларҙы ҡала йәштәре араһында киң таралған тәмәке тартыу, һыра эсеү кеүек алама ғәҙәттәрҙән дә һаҡлап ҡала алдыҡ. Иң мөһиме лә шулдыр: ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең күңелдәренә телебеҙгә ихтирам менән бергә, милли рухыбыҙ менән ғорурлыҡ тойғоһон да бишектән үк һалыу фарыз.

*Мирас ИҘЕЛБАЕВ, олатай:*

- Һис шикһеҙ, хәҙер ҡала мөхитендә ейәндәребеҙҙе үҙ милли рухыбыҙҙа тәрбиәләү өсөн шарттар элеккегә ҡарағанда күпкә яҡшырҙы. Үҙебеҙҙең балаларыбыҙҙы үҫтергән осорҙа башҡорт балалар баҡсалары, башҡортса уҡытыу алып барылған мәктәптәр хыялдарҙа ғына йәшәй ине бит. Ул ғына ла түгел, мәктәптәрҙә балаларҙың башҡортса һөйләшеүен ят күреп, хатта тыя ла торғайнылар ул саҡтарҙа. Әле лә иҫемдә, радио-телевидениела балалар өсөн тапшырыу яҙҙырырға булһалар, бигерәк тә йәй айҙарында, башҡортса иркен һөйләшә алған 1-2 бала таба алмай яфалана инеләр. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ балаларыбыҙҙы туған телебеҙҙә аралашырға ла өйрәтә алдыҡ, рухи тәрбиә лә бирҙек. Әгәр ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең ата-әсәләре рухлы икән, ул күсәгилешлек артабан да дауам итәсәк. Был ғаилә тәрбиәһенең төп шарты, тип уйлайым. Әлбиттә, балаларыбыҙ үҙ ғаиләләре менән айырым йәшәгәс, беҙ ейәндәребеҙ менән һирәгерәк аралашырға мәжбүрбеҙ. Әммә улар рухлы булып үҫһен өсөн яуаплылыҡ барыбер беҙҙең дә өҫтә. Олатай-өләсәй йоғонтоһоноң үҫеп килеүсе балаһағаға һөҙөмтәлерәк булыуын да онотоҙға ярамай. Мостай Кәрим дә бит, бик күп йылдар үтһә лә, үҙ булмышына йүнәлеш бирә алған, йөрәгенә бик яҡын булған Оло инәһе образын ҡәҙерләп, күңел түрендә һаҡлап йөрөткән. Ейәндәребеҙ күңелендә беҙ ҙә үҙ урыныбыҙҙы тапһаҡ, уларҙы шулай уҡ рухлы итеп үҫтерә алырбыҙ, тип уйлайым.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# МӘРТӘБӘЛЕ МАТБУҒАТ

**"Киске Өфө"гә минең кистәрен уның биттәрен аҡтарғанда ғына түгел, тәүлек буйына, хатта йыл оҙайлығында ла мөхәббәтем, хөрмәтем өҙөлмәй. Сәбәбе ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта бер ауыҙ һүҙ менән генә әйтеп бөтөрөп тә булмай. Ябай, сөнки күп темаларҙы күтәргән матбуғат баҫмаһы ул. Ә темалар күтәреү, уларҙы аңлайышлы итеп халыҡҡа еткерә белеү - үҙе ҙур ижади маһирлыҡ. Бына шуға ла "Киске Өфө" хаҡында байтаҡ һөйләргә кәрәк, ә был, әйткәнемсә, ябай ғына һүҙ түгел.**

**Һәр хәлдә, "Киске Өфө"нөң киләсәге бар! Ул - уҡыусылар күңелендә. Минеңсә, уны бер алдырған кеше башҡаса был гәзиттән айырыла алмай. Әле яңы ғына танышҡан кеше лә уны бер ваҡытта ла онотмаясаҡ, киреһенсә, күңеленә зауыҡ, аңына аҡыл туплаясаҡ. Халыҡтың яратҡан, көтөп алған гәзитен алдағы йылда ла үҙен хөрмәт иткән һәр кеше, һәр ғаилә алдырыр, тип ышанам.**

**Шуға инанып,**
**Риф МИФТАХОВ.**



**"Киске Өфө"нөң 50665 индексլыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин тора.**

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

# МУЛЛАҠАЙМЫ - МУЛЛЫҠАЙМЫ?

## Абҙаҡмы-Ауыҙы аҡмы? Мораҡмы-Морнаҡмы?



**Башҡортостанда бер үк исемдәр йөрөткән ауылдар бар. Уларҙың төүгеһе Баймаҡ, Ҡариҙел һәм Архангель райондарында Муллаҡай, ә Белорет менән Учалы райондарында Мулдаҡай тип йөрөтөлгән ауылдар. Был ауыл исемдәренең килеп сығыу тарихы хаҡында күп уйланғаным бар: нисегерәк барлыҡҡа килгән, кемгә бәйле улар? Нишләп Юрматы диалектында - Муллаҡай, ә Ҡыуаҡан диалектында - Мулдаҡай? "Мулла" атамаһының кесерәйтеү формаһымы был, әллә икенсе һүҙме?**

Билдәле булыуынса, боронғо башҡорттарҙа сабыйға исем ҡушыу бик етди һәм яуаплы ритуал һаналған. Был исемдәр араһында юрауға бәйлеләре айырым бер урын биләп тора. Мәҫәлән, юл йөрөгәндә сәфәрҙәре һәр саҡ уң булһын өсөн балаларға Юлдыбай, Юлдыҡай, Юламан, Юлғотло, Юлгилде, Юлҡай кеүек исемдәр ҡушҡандар. Киләсәктә сабыйҙың тормошонда ҡот юлдаш булыуын теләп, Ҡотлобай, Ҡотлогилде, Байғотло, Ҡотлосура, Ҡотлосәләм исемдәрен һайлағандар. Әлбиттә, һәр кем үҙ балаһының бай, етеш тормошта йәшәүен теләгән, шуға күрә Байгилде, Баймырҙа, Килдебай, Байсура, Ырыҫбай, Дәүләтбай, Бөркөтбай, Төлкөбай, Йылҡыбай һымаҡ исемдәр ҡушҡандар. Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, ата-бабаларыбыҙ үҙ нәҫелдәренең мул йәшәүен дә бик теләгән һәм ир балаларға Мулдыҡай тигән исем биргән (Юрматы диалектында - Муллыҡай). Нәҡ шунан сығып, үрҙә телгә алынған ауылдарға атама биргән заттарҙың исемдәре "мулла" һүҙенең кесерәйтеү формаһынан яһалған Муллаҡай (Мулдаҡай) түгел, ә Муллыҡай (Мулдыҡай) булғандыр, тигән фекергә киленә. Икенсенән, юрматылар ҙа, ҡыуаҡандар ҙа "мулла" һүҙен бер төрлө әйтә. Өсөнсөнән, Мулдыҡай (Муллыҡай) тигән исем бик боронғо замандарҙа - башҡорттар араһында Ислам дине таралғанға тиклем үк барлыҡҡа килгән. Уның, башҡа боронғо башҡорт һәм дөйөм төрки исемдәре менән бергә, ҡулланылыштан төшөп ҡалыуы шул турала һөйләй.

Ошоға бәйле, Белорет районындағы Рысыҡай ауылының исеме бик ҡыҙыҡлы. Үрҙә әйтелгән юрау исемдәренең яһалыу принцибынан ҡарағанда, уның төүге формаһы "Ырыҫлыҡай" булырға тейеш. Ваҡыт үтә килә, ҡайны бер хәрефтәр йотолоп, был ауылдың исеме хәҙерге әйтелешендә тороп ҡалғандыр, тип фараз итергә була.

Игеҙәк ауылдарҙың икенсеһе - Абҙаҡ. Был исемдәге ауылдар Баймаҡ, Белорет, Учалы райондарында теркәлгән. Уларҙың этимологияһын, ғәҙәттә, "абыҙ" тигән төшөнсә менән бәйләйҙәр. Йәғни, уҡымышлы, белемле кеше. Элекке уҡыуҙың дини йүнәлештә булғанлығын иҫәпкә алһаң, шул уҡ мулла, имам. "Аҡ" тигән сифатты ҡушһаң, аҡ абыҙ йәки аҡ мулла, тигән һүҙбәйләнеш килеп сыға.

"Ҡуласа" романын яҙыр алдынан мин башҡорт ырыуҙарының урыҫ дәүләтенә ҡушылыу осорона ҡағылышлы әҙәбиәтте ҡарап сыҡтым. Шунда Бурнаҡ тигән бей иғтибарҙы йәлеп итте. Башҡортсаға әйләндергәндә, был исем Морнаҡ (мороно аҡ) була.

Йәнле һөйләү телендә "аҡ" һүҙенең мәғәнәләре ифрат күп төрлө. Уның бер күсмә мәғәнәһе һүҙлектә шулай аңлатыла: "Кеше күңелен аңлатҡан һүҙҙәр менән килеп, рухи таҙалыҡты, сафлыҡты белдерә. Мәҫәлән, аҡ йөҙ, аҡ күңел". Әҙәм балаһы күңелдәгеһен тел ярҙамында аңлата, ә тел - морондоң, ауыҙҙың иң мөһим бер өлөшө. Тимәк, боронғо дөйөм төрки исемдәре булған Бурнаҡ (бороно аҡ), Ауыҙаҡ (ауыҙы аҡ) кеше күңеленең торошон, атап әйткәндә, уның таҙалығын, сафлығын юраусы төшөнсәләр булып сыға. Әйткәндәй, Күгәрсен районының үҙәге Мораҡ ауылының төүге формаһы ла Морнаҡ (мороно аҡ) булманымы икән? Телдең аяу белмәҫ эске закондары буйынса, тора-бара яңғырауыҡлы "р" өнөнән һуң килгән "н" өнө йотолоп, уның Мораҡ булып ҡалыуы ихтимал.

Бөгөн Абҙаҡ рәүешендә яҙып йөрөтөлгән ауылдарҙың төүге формаһы Ауыҙ(ы)аҡ булғанлығы әллә ни шик уятмай, сөнки ул да төрки халыҡтары араһында Ислам дине таралмаҫ борон уҡ киң ҡулланылышта йөрөгән бик боронғо исемдәрҙең береһе. Уның боронғолоғо төрки милләттәренең уғыҙ тармағына ҡараған гагауз халҡының үҙатамаһына барып тоташыуында күренә.

Төрки-мосолман исемдәре яһалышында бер үҙенсәлек бар: уларҙың ҡайһы берҙәре кире әйтелешкә ҡоролған. Мәҫәлән, Дәүләтбай - Байдәүләт, Торсонбай - Байторсон, Ҡотлобай - Байғотло, Тимерхан - Хантимер, Морнаҡ - Аҡморон һ.б. Гагауз халҡының атамаһы ла ошо принциптан сығып яһалғанға оҡшай. (Ауыҙ(ы)аҡ - Аҡ ауыҙ, ағауыҙ, гагауз).

**Шулай итеп...**

**Дөйөмләштереп әйткәндә, беҙгә әле үҙ тамырҙарыбыҙҙы эҙләргә лә эҙләргә, тарих һәм тел хикмәттәрен асырға ла асырға. Әлбиттә, үрҙә яҙылған фекерҙәр һуңғы инстанциялағы хәҡиҡәт булыуға дәғүә итмәй, улар тик шәхси фараз, гипотеза рәүешендә генә тәҡдим ҡылына. Ошо хаҡта тел һәм топонимика өлкәһендә эшләгән күренекле ғалимдарыбыҙҙың фекерҙәрен ишетке килә.**

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЧИНОВНИК ЭТӘ ЛӘ ТӨРТӘ...

## Ә "ҡулайлаштырыу" дауам итә

БР Прокуратураһының матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, Ҡыйғы районының Арыҫлан ауыл советы биләмәһе башлығы ошо биләмәгә ҡараған ауылдарҙың береһендәге башланғыс мәктәпте ябыу тураһында протокол төҙөгән. Законға ярашлы, ошо ауылда әлеге мәсьәлә буйынса сход та уҙғарыла. Һеҙ ошо ауылда йәшәүселәр мәктәпте ябыу менән килешкән, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ, әлбиттә. Киреһенсә, халыҡ алдан сығарылған ҡарар менән риза булмауын белдергән. Әммә, ауыл советы биләмәһе башлығы, сход ҡарамағына сығарылған мәсьәләне тауышҡа ла ҡуйып тормайынса (тауыш биреүселәрҙең ҡарашы былай ҙа билдәле бит инде), үҙ белдеге менән башланғыс мәктәпте ябыу тураһында ҡарар теркәлгән сход протоколын төҙөп тә ҡуя. Уға нимә, үҙ ауылының мәктәбен япмай ҙа баһа! Тик шуныһы ҡыҙғаныс: ауыл кешеләренең хоҡуҡтарын яҡлар һәм һаҡлар өсөн ҡуйылған чиновникка закон бар ни ҙә, юҡ ни. Ярай әле урындағы суд әлеге башлыҡтың ҡылғанын законһыҙ тип табып, мәктәпте ябыу тураһындағы сход ҡарарын ғәмәлдән сығара.

Бына шуның менән конфликт тамам, хәҡиҡәт өҫкә сыҡты, тип тынысланырға ла булыр ине. Тик шуныһы ғына күңелде ҡырып тора: урындағы етәкселәребеҙ Башҡортостан Президенты М. Ғ. Рәхимовтың мәғариф хеҙмәткәрҙәренең республика кәңәшмәһендә ваҡ ауылдарҙағы бер генә башланғыс мәктәпте лә ябыуға юл ҡуймау зарурлығы хаҡында әйткәндәрен ишетмәнеме икән ни? Әллә ишетепбелеп тә, Президент фекерен һанға һуҡмауҙары шулмы икән? Миңә ҡалһа, был ваҡиға мәғариф өлкәһендә ямanаты сыҡҡан "ҡулайлаштырыу" программаһын этеп булмаһа, төртөп тигәндәй, ғәмәлгә ашырырға тырышыуҙың ғәҙәти бер сағылышы ғына ул. Бына ошондай факттар кемгә нимә ҡулайлы икәнен төшөндөрә лә инде беҙгә: халыҡ киләсәге өсөн һәр бер ауылыбыҙҙың йәшәүе, бөтмөүе ҡәҙерле булһа, чиновниктар өсөн үҙ мәшәҡәттәрен нисек тә булһа кәметеү ҡулайлы!

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән раҫланған махсус программаға ярашлы, тиҙҙән Башҡортостандан йәш белгестәрҙе сит илдәргә стажировка үтергә ебәреү тормошҡа ашырыла башлаясаҡ. Быйыл 30 кеше сит илдә уҡыуға грант алған да инде. Улар менән ошо көндәрҙә БР Премьер-министры Раил Сарбаев осрашты. Был белгестәр ихтыяж ҙур булған ун йүнәлеш - халыҡ-ара иҡтисад, мәғарифта инновацион технологиялар, инновацион менеджмент, административ идара, халыҡ-ара хоҡуҡ, мәғлүмәт технологиялары, социаль яҡлау, ауыл хужалығы, фандрайзинг буйынса уҡыясаҡ йәки стажировка үтәсәк. Белем артынан йәштәр Бөйөк Британияға, Мальтаға, Канадаға һәм донъяның башҡа билдәле университеттарына юлланасаҡ. Уҡыу ваҡыты - бер йыл. Киләсәктә грант алыусылар һаны арттырыласаҡ.

✓БР Үҙәк һайлау комиссияһы киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән берлектә семинар-кәңәшмә ойоштороусылар... 

✓Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы ойошторолоуға 90 йыл тулыу айҡанлы байрам саралары булып үтте.

✓Республикала Бөйөк Ватан һуғышында данлы юл үткән 112-се кавалерия дивизияһының легендар командиры генерал Миңлеғәле Шаймуратовтың тыуыуына 110 йыл тулыуға арналған саралар үтә. Ошо көндәрҙә былдай сара уның тыуған ерендә - Ҡырмыҫҡалы районының Шаймуратов ауылында үтте.

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты саҡырыуы буйынса Төркиәнең Анкара университеты профессорҙары Мурат Юрдадок менән Кадрие Юрдадок Өфөгә килде һәм университетта яңы тыуған балаларҙың үпкә ауырыуҙары, уларҙы вакцинациялау һәм педиатрияларға эко-социаль мәсьәләләр буйынса лекциялар уҡыны. Ҡунаҡтар шулай уҡ Асҡын районында "Танып" дауаханаһында ла булды һәм был шифахана эшенә юғары баһа бирҙе.

ДӘҒҮӘСЕ ҺҮҘЕ



**Ҡалабыҙ урамдарында ирендәрен ҡыбырлатып, үҙ алдына нимәлер һөйләнеп йөрөгән кешеләргә иғтибар иткәнегеҙ бар микән, йәмәғәт? Барҙыр. Һуңғы арала мин дә ундайҙарҙы аҙым һайын тиерлек осратам. Улай ғына ла түгел, мин үҙем дә башҡалар кеүек үк, башымда ҡайнаған төрлө уйҙарҙы үҙ алдыма һөйләп, ирендәремде йыбырлатып йөрөгәнемде абайлап ҡалдым. Ул ғәләмәт психология телендә эске репликация (йәғни, үҙ-үҙеңә нимәнелер ҡабатлау, иҫтә ҡалдырыу, хәтерләү) йәки интроперсональ (эгоцентрик) әңгәмә тип атала икән. Баҡтиһәң, ҡайһы бер кеше өсөн үҙ-үҙе менән һөйләшеп алыу һауа кеүек кәрәк. Юғиһә, ул үҙ уй-фекерҙәренең дөрөҫлөгөнә бер нисек тә ышана алмай. Мин дә шулай. Кешеләргә әйтер һүҙемде тәүҙә үҙемә ҡысҡырып әйтмәйенсә, уның дөрөҫлөгөнә, хаҡлығына ышанмайым. Шуға ла Өфө урамдары буйлап ауыҙ йыбырлатып тик йөрөйөм. "Аҙна шаңдауы" рубрикаһы аҫтындағы материалдар ҙа тап шулай тыуа. Әле һеҙҙең хөкөмөгөҙгә, шулайтып, ауыҙ йыбырлатып, ирен ҡыбырлатып йөрөү һөҙөмтәһендә тыуған яҙмаларымды тәҡдим итәм.**

# КӘЛӘШ, ФЕНОЛЛЫ "АҠ ҠАЛАС" ҺӘМ ИНТЕРНЕТ,

## йәки Журналистиканың бөгөнгөһө һәм иртәгәгеһе хаҡында уйынлы-ысынлы яҙмалар

### Мин шулай башландым

Журналистикаға осраҡлы рәүештә генә килеп индем. 18 йыл элек булды ул хәл. Тәү ҡарашҡа бер-береһе менән бер ҙә бәйле түгел бер нисә сәбәп быға этәргес көс булды. Беренсенән, кәләшем. Ул баш ҡалаға Өфө дәүләт сәнғәт институтының киске бүлегенә документтарын тапшырырға тип киткәйне, үҙе лә, мин дә көтмәгәндә, көндөҙгө бүлеккә уҡырға инеп ҡайтты ла төштө. Барабыҙ, тинем. Башҡа сара юҡ ине. Икенсенән, әлбиттә, ул йылдарҙа Өфөлә булған "фенол фажиғәһе". Дөрөҫөрәге, минең үтә ышаныусан булыуым. Юҡ-барға ышанып барыуым, тимәк. Бер ҡатлылығым, йәғни. Минең дыуамалланып "Алға, Өфөгә!" тип ҡылыс болғауым "фенол ваҡиғалары"нан һуң баш ҡала халҡының күпләп Өфөнө ташлап ҡасыуы, унда фатирҙарҙың, хатта тотош торлаҡ йорттарҙың буш тороуы тураһындағы имеш-мимеште ысынға алыуым менән бәйле. Мостай ағай әйтмешләй, унда беҙҙе "аҡ ҡалас тотоп көтөп тороуҙарына" ихлаеслап ышаныуым мине Өфөгә һәм артабан журналистикаға килтерҙе лә инде.

Мин ул саҡта күп нәмәне белмәй инем әле. Күсеп килдек, урынлаштыҡ. Әйткәндәй, 1991 йылда бөгөн Өфөгә килеүселәрҙең алдында торған торлаҡ проблемаһы булманы. Дөрөҫөрәге, торлаҡ та булманы. Һәм уны йәшәүгә биреп тороусылар ҙа бик һирәк ине. Уның ҡарауы, Өфө тулы ятаҡ ине, йәмәғәт. Башҡорт зыялыларының иң аҫылдарының иң күркәм осорҙары ятаҡта үтте. Беҙ килеп урынлашҡан Өфө дәүләт сәнғәт институтының Пушкин урамындағы ятағы бөгөнгө көндә мәҙәниәтебеҙҙең "ойотҡоһон" тәшкил иткән халыҡ һәм атҡаҙанған әртистәрҙе - йырсыларҙы, бейеүселәрҙе, ҡурайсы һәм баянсыларҙы, актерҙар һәм актрисаларҙы үҙ эсенә һыйҙырған күркәм бер бина ине. Ике-өс кенә түгел, биш бала менән йәшәгәндәр ҙә булды. Был ятаҡтың янғын баҫҡысын ышыҡлап торған бейек стенаһы бар. Уны төҙөүселәр махсус рәүештә иҫтәлекле таҡталар элеү өсөн тәғәйенләп эшләгәндәр кеүек. Ваҡыты еткәс, ул стенаны, "Был ятаҡта фәлән-фәлән йылдарҙа Башҡортостандың халыҡ артисы Фәлән Фәләнович Фәләнов йәшәне һәм ижад итте" тигән таҡтаташтар ҡапламаҫ, тимә.

Өсөнсөнән, журналистикаға барып эләгеүем минең елкәнең йоҡараҡ булыуынан киләлер, тигән уйҙамын. Эйе, Өфөгә барыу-бармау тураһында һүҙ сыҡҡас, кәләшемә ҡыҙыу баш менән "биш йыл буйына урам һеперһәм дә һине уҡытып сығарам" - тип вәғәҙә итеп ташлағайным. Баш ҡалаға килеп, уның урамдарын күргәс, был уйымдан кире ҡайттым. Өфө урамдары тар булмағанлығын абайланым ҡапыл ғына. Бынан тыш, нишләптер, ул саҡта Өфөлә ҡар ҙа йышыраҡ һәм күберәк яуа ине, шикелле. Әллә миңә генә шулай тойолдо микән? Ә мин көрәк, һепертке тотоп өйрәнмәгән кешемен. Ғаиләлә кинйәкәү булдым. Ағай-апайҙарым эш тейҙермәне. Интернатта музыка серҙәренә генә өйрәнеп үҫтем. Мәктәп йылдарында ла, армияла ла торбанан ауырыраҡ нәмә күтәргән булманы. Торба тигәнем, газ йәки нефть торбаһы түгел, әлбиттә, самауыр торбаһы ла түгел, ә шундай музыка ҡоралы. Ауырлығы бер кило буламы, юҡмы. Шуға ла кәләшкә биргән вәғәҙәм һаман үтәлмәй ҡала килә. Дөрөҫ, мин уны барыбер уҡытып сығарҙым. Әммә урам һепереп түгел.

Эш барыбер табырға кәрәк ине. Урамда 90-сы йыдарҙың башы. Магазиндарҙа бар нәмә талон буйынса ғына. Кәләш төшкә хәтлем уҡый, төштән һуң талон тотоп, май, йомортҡа, колбаса артынан сиратҡа тора. Миңә өйҙә ятыуы оят. Тегендә барып төртөләм, бында һуғылам - берәүгә лә кәрәк түгелмен. Өфөнөң мине ҡабул иткеһе килмәй. Бер аҙна самаһы шулайтып ҡаңғырғас, нисектер, Башҡортостан телевидениеһына барып индем. Унда миңә эш табылыр, тип өмөтләнгәнмен микән, йүләр? Юлай Ғәйнетдиновты осраттым. Күсеп килдек, тинем. Хәлемде һөйләнем. Ә ул бит минең ағай. Ярҙам итмәй булдыра алмай. Кәңәш менән булһа ла. Бәләкәй саҡта уймаҡ ҡына ҡурай эшләп тотторол киткәне бер ҙә оноторлоҡ түгел. Ҡурай уйнарға өйрәнә алманым, әммә йылы хәтирәләр ҡалды. Ул миңә йәлләп кенә ҡараны ла, уға ғына хас йомшаҡ тауышы менән: "Һин, ҡустым, "Йәшлек"кә барып ҡара. Унда яңы йәш мөхәррир килгән - Артур Иҙелбаев. Үҙенә яңы команда йыя. Оҡшаһаң, алыр", - тине.

Ҡурҡтыммы икән? Әлбиттә! "Йәшлек" ҡайҙа ла, мин ҡайҙа. Суверенитет юлында яулап алынған тәүге "емеш"тәребеҙҙең береһендә эшләгән кешеләр минең өсөн Алла кеүектәр ине. Шөрләһәм дә, барҙым. Күҙ алдымдан һепертке шәүләһе китмәй бит. Бөгөнгөләй хәтерләйем - Артур Иҙелбаев тәү барғанымда : "Штаттар раҫланмаған. Йомаға ҡаршы килерһең", - тип бороп сығарҙы. Әммә әрләмәне, битәрләмәне. Бында һәптәнләп йөрөмә, тимәне. Яғымлы ғына һөйләште. Төшөп ҡалғандарҙан түгел икәнмен, тигән уйҙар менән ҡайттым ятаҡҡа. Йома көнө тағы барҙым. Был юлы оҙағыраҡ һөйләште, йәшәгән урынымды һорашты, районымды белеште лә: "Дүшәмбе көн килеп сыҡ", - тип сығарып ебәрҙе. Ә дүшәмбе көнө планеркала ҡатнашыусыларға исем-шәрифтәремде атап, "яңылыҡтар бүлеге мөдире" тип таныштырҙы. Шулайтып, журналист булып киттем.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ИҒТИБАР!*

## ЖУРНАЛИСТАР БӘЙГЕ ТОТА

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең журналистика өлкәһендә Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар биреү буйынса комиссияһы ултырышы булып үтте. Ултырышты комиссия рәйесе, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев алып барҙы.**

Комиссия тәҡдим ителгән эштәрҙе ҡарағандан һуң, **Фәрит Әхмәҙиев, Юрий Ергин, Миләүшә Иҙрисова, Таһир Ишкинин, Хәмит Нәбиев, Флүрә Солтанова, Руфина Хәсәнова, Тамара Юлдашева, Зөфәр Толомғужинды** конкурста ҡатнашыусылар исемлегенә индерергә ҡарар итте. Комиссия йәмәғәт ойошмаларын, хеҙмәт коллективтарын һәм айырым кешеләрҙе 2009 йылға Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға дәғүә итеүсе журналистарҙың ижадын тикшереүҙә ҡатнашыуҙы һорай. Фекерҙәрҙе һәм тәҡдимдәрҙе матбуғат биттәрендә, телевидение һәм радио тапшырыуҙарында йәки түбәндәге адрес буйынса ебәрелгән хаттарҙа белдерергә мөмкин: 450076, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге урам, 13, 10-сы ҡат, БР Журналистар союзы, телефон-факс: 276-42-66.

Конкурста ҡатнашыусылар ижадын тикшереү ваҡыты бик ҡыҫҡа - 30 сентябргә тиклем. Һуңлап ҡалмағыҙ!

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Куйбышев тимер юлы 30 сентябрҙән Нижневартовск йүнәлеше буйынса тағы ла бер өҫтәмә поезд тәғәйенләй. Ул Өфөнән һәр айҙың 6,12,18, 24, 30-сы көндәрендә китә.

✓ Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Президиумы ултырышында Башҡортостандың Конституция суды рәйесе вазифаһына Люциә Ғүмәрованы тәғәйенләү тураһындағы мәсьәләне депутаттарҙың сираттағы пленар ултырышы ҡарауына сығарыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Уның элекке рәйесе Илдус Әҙеһәмовтың отставкаға китеүе сәбәпле, Люциә Ғүмәрованың кандидатураһын Башҡортостан Республикаһы Президенты тәҡдим итте. Люциә Шаһыбал ҡыҙы 1959 йылдың 1 ғинуарында Хәйбулла районында тыуған, юридик фәндәр кандидаты, 1996 йылдан БР Конституция суды судьяһы.

✓ Быйыл һигеҙ айҙа республика территорияһында 1808 кеше үҙ-үҙенә ҡул һалған. Шуларҙың 43-ө - бәлиғ булмаған балалар. Был көндәрҙә булып үткән Хөкүмәт ултырышында ошо мәсьәлә тураһында ла һүҙ булды. Премьер-министр Раил Сарбаев мәҙәниәт һәм мәғариф учреждениелары адресына ҡәтғи белдереү яһаны. "Әгәр кеше ни менәндер шөғөлләнһә, тормошо тулы булһа, уның башына ҡара уйҙар инмәйәсәк", тине ул.

✓ Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүенә быйыл 19 йыл тула. Ошо байрамға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты ултырышы булды. Тантаналы сара 9 октябрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында үтә.

✓ 20 сентябрҙән Рәсәй Федерацияһы территорияһында "Милләт кросы - 2009" Бөтә Рәсәй йүгереү көнө старт ала. Өфөлә был сара бөгөн, 19 сентябрҙә үк башлана һәм унда 10 меңләп кеше ҡатнашасаҡ.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәтендә грипты һәм үткер респиратор ауырыуҙарҙы иҫкәртеү саралары тураһында ҡарар ҡабул ителде. Быйыл Өфөлә "Сәләмәтлек" милли проекты буйынса балаларҙы, медицина һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәрен, 60 йәштән өлкәндәрҙе вакцинациялау өсөн 208550 доза күләмендә вакцина бүлеү ҡарала. Шулай уҡ баш ҡала округы хакимиәте лә өҫтәмә вакцина һатып алыу өсөн 9,9 млн аҡса бүлә.

✓ *Уны Европа хоккейсыларының йыйылма командаһы, тиһәк, дөрөçләккә яҡыныраҡ булырбыҙ. Өҫтәүенә, улар һуғыш суҡмарҙары икән, үтә тупаҫ уйнауҙары менән танылды.*



*АФАРИН!*

## БАШҠОРТ БАЛЫН... ғәрәптәр ҙә татыясаҡ

**Башҡорт балының даны тағы ла алыҫҡараҡ таралаcаҡ, хәҙер беҙҙең балдың шифаһын Кувейт халҡы баһалаясаҡ. Ошо арала Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры Әмир Ишемғолов һәм "Анхар аль-Асал" ("Баллы йылғалар") компанияһы вәкиле Уалид Альсомайт башҡорт балын һәм умартасылыҡ тауарҙарын сығарыу буйынса ике яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйҙы.**

Быйыл май айында әлеге килешеүҙә ҡатнашыусыларҙың береһе Кувейттағы ваҡуфтар министрлығы хеҙмәткәре, фән кандидаты Салем Албайнони Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенә килеп, республикала етештерелгән бал һәм умартасылыҡтың башҡа төр тауары менән танышҡан. Иленә кире әйләнеп ҡайтҡас, коллегалары менән тик башҡорт балы менән генә шөғөлләнгән "Анхар аль-Асал" ("Баллы йылғалар") компанияһы төҙөп, махсус магазин асҡан. Әлеге контракттың суммаһы 10 млн доллар тәшкил итә.

Әмир Ишемғолов әйтеүенсә, был илдә татлы ризыҡтар күп әҙерләнә, шул иҫәптән бал ҡушып эшләнгәндәре лә байтаҡ. Тикшеренеү һөҙөмтәләре башҡорт балының Кувейт балынан сифаты буйынса күпкә өҫтөн тороуын күрһәткән. Хәҙер ғәрәп илдәрендә балдан тыш, инә ҡорт һөтө, һитә һәм башҡа умартасылыҡ тауарҙары хаҡында ла белəсәктәр. Әйткәндәй, кувейттарҙы бал дауалау ысулы булараҡ та ҡыҙыҡһындыра. Улар бал менән дауалаған Башҡортостан табибтарын Кувейтҡа килеп, тәжрибә уртаҡлашырға тәҡдим индерҙе.

БР Сәнәғәт һәм тышҡы иҡтисад бәйләнештәре министры урынбаҫары Вилорий Яҡупов билдәләүенсә, был ил беҙҙең төбәк хеҙмәттәшлек иткән дәүләттәр исемлеген тағы ла тулыландырасаҡ. Тәүге ярты йылға йомғаҡ һөҙөмтәләре буйынса, республиканың тышҡы сауҙа әйләнеше 2,2 миллион доллар тәшкил иткән, шуның 1,9 миллиарды экспортҡа тура килә. Башҡортостан бөгөн йөҙҙән ашыу ил менән эшлекле бәйләнештәр алып бара. Рәсәй сиктәренән тыш сығарған тауар төрө, шул иҫәптән, умартасылыҡ тауарҙары артҡандан-арта. Әйтәйек, быстыр илдән 32 тонна башҡорт балы экспортҡа сығарылһа, быйыл алты айҙа ғына был һан 65 тоннаға еткән. Бөгөн беҙҙең бал Америка, Франция, Япония, Монголияға билдәле.

- Республиканың тәбиғи потенциалы бөгөн 175 мең тонна һатыуға ярарлы бал етештереүгә мөмкинлек бирә. Умартасылар араһында уҙғарылған республика конкурс һөҙөмтәләре лә был һөнәр эйәләренең юғары кимәлдәге оҫталығын күрһәтте. Шуға ла беҙ умартасылыҡ өлкәһен тағы ла үҫтерергә, балды Рәсәй, донъя баҙарына сығарыу күләмен 1000 тоннаға тиклем еткереү өсөн тырышырға тейешбеҙ, - тине Әмир Ишемғолов.

**Динара ИШБУЛАТОВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ЯНҒЫН ҺҮНДЕРӘМ, ТИҺӘҢ...

## йөрәгең ялҡынлы булһын

**Ошо көндәрҙә Өфөлә янғын һүндереүселәр һәм ҡотҡарыусылар араһында янғын һүндереү ғәмәли спорты буйынса V донъя чемпионаты уҙҙы. Ярыштың символик уты уҙған донъя беренселеге үткәрелгән Софиянан һуң республикабыҙ баш ҡалаһының "Динамо" стадионында тоҡандырылды. Ун дүрт илдең янғын һүндереүселәре һәм ҡотҡарыусылары өс көн буйы тәжрибә һәм етеҙлек буйынса көс һынашты.**



Янғын һүндереү ғәмәли спорты янғын һүндереүселәрҙең физик халәтен юғары кимәлдә тотоу маҡсатын күҙ уңында тотҡан күнегеүҙәрҙән төҙөлгән спорт төрө. Улар был спорт менән профессиональ рәүештә шөғөлләнә. Ошоноң өсөн был ярыш ғәмәли спорт төрөнә ҡарай ҙа инде. Бында дүрт ҡатлы йортҡа штурм баҫҡысы буйлап менеү, ҡаршылыҡтар аша 100 метрға йүгереү, эстафета һәм боевой әҙерлек булдырыу кеүек ярыш төрҙәре инә. Уларҙың нигеҙен гәҙәттән тыш хәлдәрҙә, янғын һүндергәндә кәрәкле күнекмәләр тәшкил итә.

Башҡортостан был спорт төрө үҫешкән, янғын һүндереүселәр һәм ҡотҡарыусылар тотороҡло эшләгән төбәк. Был чемпионатта Башҡортостан, хужа булараҡ, ярышҡа үҙ командаһын сығарҙы. Конкурстан тыш ҡатнашһалар ҙа, республика спортсылары дөйөм фонда лайыҡлы күренде, Рәсәй, Чехия, Украина, Белоруссия командалары менән бер тигеҙ сығыш яһап, тамашасыларҙа ыңғай тәьҫорат ҡалдырҙы.

Ярыштарға килгәндә, улар янғын һүндереүселәрҙең юғары профессионаллеге тураһында һөйләне. Янғын һүндереү спорты - ҡыйыу рухлы заттарҙың көндәлек хеҙмәте көҙгөһө. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министры Сергей Шойгу әйтеүенсә, был спорт төрөндәге һәр секунд кеше ғүмерен ҡотҡарыуға гарант булырлыҡ. Ошо хеҙмәтте башҡарыусыларҙың физик таһыллығы, психологик фактор менән бер рәттән, иң ауыр һәм ҡатмарлы осраҡтарҙа ла енеп сығыу мөмкинлеген булдыра. Ә ярыштар кешеләрҙә хәүеф-хәтәрҙән дә иҫкәртеп тора. Уларҙы ҡарап, тамашасы үҙ зауығын ғына ҡәнәғәтләндермәй, тормошта кәрәк буласаҡ һабаҡ та ала.

Янғын һүндереүселәр спорты илебеҙҙә үҫеш ала бара. Егерме меңгә яҡын үсмер Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә ошо спорт төрө менән даими шөғөлләнә. Баш ҡалабыҙҙа үткәрелгән беренселек беҙҙә уға ҡарата күптәрҙең ҡыҙыҡһыныуын уятыр, тип ышанғы килә. Ә әлегә Өфө донъя беренселеге менән хушлашты. Киләһе VI чемпионат Украинала үтәсәк.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ.**

*ХОККЕЙ*

# ГАГАРИН КУБОГЫ КЕМГӘ?

**Маҡсат ҙур: континент хоккей лигаһы чемпионатында иң юғары бүләкте - Гагарин кубогын яулап алыуға өлгәшеү. "Салауат Юлаев" командаһы үҙ алдына ҡуйған был ҙур маҡсатҡа өлгәшә алырмы? Быны миҙгел буйы барған уйындар күрһәтер.**

Юлаевсылар яңы сезонда 12 сентябрҙәге беренсе уйынды Латвияның баш ҡалаһы Ригала урындағы "Динамо" менән үткәрҙе. Осрашыу юлаевсыларҙың яңы сезонға ярайһы уҡ һәйбәт әҙерләнгәнен күрһәтте, тиергә була. Уйынды ҡунаҡтар 5:1 иҫәбе менән еңде.

14 сентябрҙә юлаевсылар Минск ҡалаһының динамосылары менән көс һынашты. Әйтергә кәрәк, Минск "Динамо"һы яңы сезонда Европаның иң көслө хоккейсылары менән тулыланды. Уны Европа хоккейсыларының йыйылма командаһы, тиһәк, дөрөçләккә яҡыныраҡ булырбыҙ. Өҫтәүенә, улар һуғыш суҡмарҙары икән, үтә тупаҫ уйнауҙары менән танылды. Юлаевсылар бындай күрәләтә һуғышып уйнауға әҙер түгел ине һәм улар йыш яғалашыуҙан бер аҙ аптырабыраҡ ҡалды. Майҙан хужалары тәүҙә 2:0 иҫәбе менән алға сыҡты. Юлаевсылар тыныша-тыныша иҫәпте тигеҙләне.

Енеүсене буллиттар һуғыу ғына асыҡланы. Динамосылар мәргәнерәк булып сыҡты. Һөҙөмтәлә улар 3:2 иҫәбе менән отто. Үтә үкенесле еңелеү юлаевсылар өсөн әсе һабаҡ булыр, моғайын!

16 сентябрҙә "Салауат Юлаев" Мәскәүҙең "Динамо"һы менән көс һынашты. Осрашыуҙа юлаевсылар көслөрәк, оҫтараҡ булып сыҡты. Улар майҙан хужаларын 5:3 иҫәбе менән ҡыйратты.

Әле яңы ғына юлаевсылар сафына баҫҡан Сергей Зиновьевтың мәргән булыуын айырыуса билдәләргә кәрәк. 5 шайбаның икеһен ул индерҙе.

Өс осрашыуҙа ла иҫәп уйынға күрә булды. "Салауат Юлаев" 3 уйындан һуң 7 мәрәй менән алдынғылар рәтендә бара.

19 сентябрҙә "Салауат Юлаев" Хабаровскизың "Амур" командаһын үҙ майҙанында ҡабул итәсәк.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлыҡтары эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡала эске эштәр органдарының быйылғы һигеҙ айындағы эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһалды. Билдәләнеләүенсә, был осор эсендә Өфөлә 16644 енәйәт теркәлгән. Был быстырғы ошо осор менән сағыштырғанда 326 фактҡа аҙыраҡ. Әммә ошо осорҙа теркәлгән 4620 ауыр һәм айырыуса ауыр енәйәттәр быстырғыға ҡарағанда күберәк. Баш ҡала урамдарында һәм йәмәғәт урындарында кеше һаулығына зыян килтерә торған һөжүмдәр, көсләүҙәр кәмегән. Шулай уҡ кеше шәхесенә ҡарата 1,5 мең енәйәт теркәлгән, уларҙың 77-һе - үлтереү. Иң күп енәйәттәр баш ҡаланың Орджоникидзе, Октябрь, Киров һәм Совет райондарында булған.

✓Баш ҡала округы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге үткәргән социологик тикшереүҙәр һөҙөмтәләренән күренеүенсә, ғаиләһенең матди хәле илдәге уртаса күрһәткестәрҙән яҡшыраҡ тип иҫәпләгән өфөләләр 27,8 процент тәшкил итә. 78 процент өфөлә финанс көрсөгө уларға ла туранан-тура ҡағыла, тип иҫәпләй. Күренеүенсә, өфөләләр арзаныраҡ һәм экологик яҡтан таҙа тауар һатыуҙы ауыл хужалығы йәрминкәләрен өҫтөн күрә.

✓19 сентябрҙә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәни үҙәге "Архангел" яҡташтар ойошмаһы менән берлектә "Архангел ере - беҙҙең ватаныбыҙ" китабының исем туйын һәм райондаштар осрашыуын үткәрә. Кисә 14 сәғәттә башлана.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 20 сентябрҙә Ураҙа байрамы уңайынан тамашасыларға "Ҡотло булһын Ураҙа ғәйете!" тигән ҙур театраль тамаша тәҡдим итә.

✓БР мосолмандары диниә назаратының Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсәһендә Башҡортостан мосолмандарының милли аҙыҡтары конкурсы үтәсәк. Конкурста ҡатнашыусыларҙың бар ризыҡтары ла мосолман йолаларына ярашлы, алкоголһеҙ һәм сусҡа итенән башҡа әҙерләнергә тейеш. Конкурсҡа йомғаҡ яһау һәм еңеүселәрҙе билдәләү Ураҙа ғәйете байрамында тормошҡа ашырыласаҡ.

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# СТРАУС ҮҪТЕР -

## ите тәмле, табышлы ла үҙе



**Страустарҙы беҙҙә, Башҡортостанда, аҫрауҙары хаҡында ишеткәнем булһа ла, уларҙы бер тапҡыр ҙа осратҡаным юҡ ине. Ҡала йәрминкәләренең берәһендә ошо экзотик ҡоштар һәм уларҙың хужаһы эшҡыуар Рәмил КӘРИМОВ менән яҡындан танышырға насип булды. Уңайлы мәле менән файҙаланып, унан страустар һәм уларҙы үрсетеү кәсебе тураһында һөйләп биреүен үтендем:**

- Эштән киткәс, үҙ шөғөлөмдә булдырыу, аҡса эшләү юлдарын эҙләнем. Шул саҡ страустар үрсетеү идеяһы башҡа килеп инде. Был ҡоштар тураһында журналдар, интернет аша ныҡлап танышҡас, тәүәккәлләнем. Страустарҙы мин Стәрлебаштан һәм Пермь өлкәһенән һатып алдым, хәҙер уларҙы үрсетеүемә ике йыл тула. Уларҙы мин Иглин районында Иҫке Ҡобау ауылында аҫрайым. Әлеге көндә алтмыштан артыҡ ҡоштарым бар. Страустарҙы аҫрау бар яҡтан да тиерлек отошло. Беренсенән, уның ите бик йомшаҡ, тәмле, ул деликатес һанала. Уның итендә холестерин бик аҙ, аҡһым юғары күләмдә, ул шулай уҡ төрлө микроэлементтарға бай булыуы менән айырылып тора. Икенсенән, тиреһенән производствола аяҡ кейемдәре, курткалар, сумкалар етештерәләр. Страус тиреһе сифаты буйынса фил һәм крокодил тиреһенә ҡарағанда бер ни тиклем өҫтөнөрәк тора. Унан эшләнгән әйберҙәр оҙаҡҡа сыҙай һәм һыу үткәрмәй. Өсөнсөнән, майы ул тиклем күп булмай, әммә ул һәр типтағы тире өсөн дә яраҡлы сеймал. Страус майы тирене дымландыра, йомшарта, шымарта, шуға ла ул косметика тауарҙары составында киң ҡулланыла. Шулай уҡ уны күгәргән, туңған йәки янған урындарға, тире ауырыуҙары булғанда, аяҡтағы веналар киңәйгәндә һөртергә кәңәш ителә. Ә инде уның экзотик ҡауырһындары ҡатын-ҡыҙ кейемдәрендә һәм театр костюмдарында ҡулланыла.

Страусты беҙҙең тәбиғәт шарттарында аҫрау әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Ҡышын һарайға лампа ҡуяһың. Улар тышҡа сығып ашайҙар ҙа, кире йылыға инәләр. Эсерҙәренә һәр ваҡыт йылы һыу бирергә кәрәк. Ҡаты һыуыҡтарҙа аҙ ғына көнбағыш майы бирәм, был уларҙың көсөн, ҡеүәтен арттыра. Улар күберәк үлән, комбикорма ашай, ҡышын кәбеҫтә, кишер бирәм. Балыҡ турап, үпкә-бауырҙы үткәреп бирһәң дә, яратып ашайҙар. Страустар һайланмай, бөтә нәмә менән дә туклана. Төрлө ауырыуҙарға бирешмәһендәр өсөн бәләкәй саҡтарында витамин бирәм, бер йыл үткәс, прививка эшләтәм. Нимәһе яҡшы: улар бик ауырый һалып, үлә һалып бармай. Ике-өс айға етеү менән шундуҡ ныҡынып китәләр, йүгерешеп, үҙ-ара һуғышып та алалар. Тик бер генә нәмә: аяҡтары һинһа, эш сыҡмай. Был саҡта инде иткә һуйып алыуҙан башҡа сара ҡалмай. Шуныһын да әйтеп үтер инем: страустар ҡаҙ, күркә кеүек үк ашай (көнөнә бер ҡошҡа 1,5 кг аҙыҡ китә), әммә күпкә артығыраҡ табыш бирә. Страус 9-10 айлыҡ булып үҫеп етһә, ауырлығы 100-150 килограмм тарта һәм шуның 50-60 проценты иткә сыға. Уның 1 килограмм ите 500 һум тора. Бер страус йылына 100-гә яҡын йомортҡа һала. Тик беҙҙә улар йомортҡаларын үҙҙәре баҫып бармай. Был, моғайын да, беҙҙәге йәшәү шарттарына бәйлелер. Африкала улар төрлө йыртҡыс януарҙан йомортҡаларын һаҡлап, көн-төн ҡараусыллап ултырһа, беҙҙә уларға бындай хәүеф янамай бит. Шуға ла мин йомотҡаларҙы инкубаторҙа сығартып алам.

Страус итен барыһынан бигерәк Япония, Америка, Европа халҡы яратып ашай, ә беҙҙә әлегә уның тәмен һәм файҙаһын белеп бөтмәйҙәр. Минә ҡалһа, был шөғөл менән Башҡортостанда шөғөлләнеүселәр артасаҡ, ул киң тармаҡ аласаҡ. Минән ике ресторан страус итен һатып алды ла инде. Әле йәрминкәгә алып килгән ун себеште лә һатып ебәрҙем. Ай ярымлыҡ бер страус себеше 8 мең һум тора. Йомортҡаларына килгәндә, аталанған йомортҡа 5 мең һум, ә ашарға яраҡлыһы, йәғни аталанмағаны 500 һум тора. Ә бер йомортҡаның ауырлығы 1,5 кг тарта. Әйткәндәй, страус йомортҡаһы балалар өсөн бик файҙалы, ул диетик аш һанала.

Киләсәктә ҙур фермалар төҙөп, махсус инкубатор һатып алып, страустар һанын тағы ла күберәк арттырыу ине ниәт.



**Шулай итеп...**
**Интернеттан алынған мәғлүмәттәр буйынса, страус йүгереүсе ҡоштар араһында донъялағы иң ҙур һәм бүтәндәрҙән айырмалы рәүештә ике тырнаҡлы берҙән-бер ҡош һанала. Ул 10-20 минут һуҙымында сәғәтенә 70 километрға тиклем тиҙлек үҫтерә ала икән. Бик ҡиммәтле һаналған страус ҡауырһындарына килгәндә, бер ҡанатында ғына 36-38 ҡауырһын була. Страустар 30-40 йылға тиклем йәшәй ала.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

ҺОРАУ-ЯУАП

# БАЛА ӨЛӨШӨ

**Әсәлек капиталын торлаҡ һатып алыуҙа файҙаланырға уйлайбыҙ. Тәүге балабыҙ дәүләт ҡарамағында - интернатта йәшәй һәм уҡый. Һатып алынасаҡ торлаҡта уның өлөшөн билдәләү мотлаҡмы, әллә ғаилә ағзаларының исемлеген күрһәтеү ҙә етәме?**

- Әсәлек (ғаилә) капиталын файҙаланып алынған торлаҡ майҙаны ата-әсәнең, балаларҙың (тәүгеһенең һәм унан һуңғыларының), шулай уҡ бергә йәшәгән башҡа ғаилә ағзаларының дөйөм милке тип таныла һәм 2006 йылдың 29 декабрендәге "Балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамының өҫтәмә саралары тураһында"ғы килешеү нигеҙендә һәр ғаилә ағзаһының өлөшө билдәләнә.

Шулай итеп, балаларҙың ата-әсәһе менәнме, әллә туғандарында йәки ваҡытлыса дәүләт интернат учреждениеһында йәшәүенә ҡарамаҫтан, әсәлек капиталын файҙаланып, фатир һатып алырға теләүсе ата-әсәләр тейешле документтарҙа үҙҙәренең бөтә балаларын да теркәргә һәм күрһәтергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта балаларҙың һәр ҡайһыны ошо фатирға милекселек хоҡуғында үҙ өлөшө милексеһе булып иҫәпләнә.

# ҺЫРА ҺЕМЕРҺӘҢ...

**Улым дуҫтары менән тәүҙә һыра эскән, аҙаҡ шарап һатып алғандар. Уларҙы милиция күреп ҡалып, протокол төҙөгән. Миңә был хаҡта бер кем бер ни хәбәр итмәне, бер ҡайҙа ла саҡыртманылар ҙа. Улыма 17 йәш, ул административ хоҡуҡ боҙоуҙа ғәйепләнә, эше мировой судьяға тапшырылған. Белеүемсә, бәлиғ булмағандар өсөн уларҙың ата-әсәһе яуап бирә.**

Һеҙ бер аҙ яңылышаһығыҙ. Беренсенән, бәлиғ булмаған балаларға протокол төҙөгәндә, уның ата-әсәһе ҡатнашлығы мотлаҡ түгел. Икенсенән, РФ Административ тәртип боҙоуҙар кодексына ярашлы, административ яуаплылыҡ 16 йәштән башлана. Уны төҙөгәндән һуң өс көн дауамында ул мировой судьяға килергә тейеш һәм 15 көн дауамында материалды мировой судья ҡарарға бурыслы. Штраф күләме улығыҙҙың ниндәй эсемлек ҡулланыуына бәйле. Ул һыра өсөн 100 һумдан 300-гә тиклем, спиртлы эсемлектәр өсөн 300-ҙән 500-гә тиклем, ә наркотик ҡулланған өсөн 1000-дән 5000 һумға тиклем тәшкил итә.

# СИРЛӘҺӘ...

**Ағайым ете ай инде төрмә дауаханаһында ята - колонияла ҡаты сиргә дусар булды. Уны төрмәнән ваҡытынан алда сығарырға тейештәрме?**

Бында ике мәсьәләгә иғтибар итеү кәрәк. Ағайығыҙҙың сире уның төрмәлә булыуына ҡаршы килгән ауырыуҙар исемлегенә (РФ Хөкүмәтенең 2004 йылдың 6 февралендәге ҡарары менән раҫланған) инәме, юҡмы икәнен асыҡларға. Икенсенән, стационар дауалау ыңғай һөҙөмтә бирмәгән хәлдә, был медицина комиссияһы тарафынан раҫланырға тейеш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Шыттырылған бойҙайҙан икмәк

Бына бер нисә йыл инде гәзитегеҙҙе бөтә ғаиләбеҙ менән яратып уҡыйбыҙ. Үткән һандарҙың берәһендә шыттырылған бойҙай тураһында уҡып ултырҙым да, шыттырылған бойҙай ҡулланып әҙерләнгән еңел генә бер рецебымды яҙып ебәрергә булдым. Күптәр шыттырылған бойҙайҙың файҙаһын белһәләр ҙә, унан ниндәйҙер ашамлыҡ әҙерләүҙә артыҡ мәшәҡәт күрә. Һаулыҡ өсөн низер эшләгәндә, ваҡытты йәлләмәҫкә кәрәк.

0,5-1 кг бойҙайҙы тәрән кәстрүлдә яҡшылап йыуабыҙ ҙа, өҫтөнә сыҡҡансы һыу ҡойоп, бер тәүлеккә ҡалдырабыҙ. Бер көндән һуң һыуын һарҡытып, сайғандан һуң, ҡапҡас менән ныҡлап ябып, тағы ла бер тәүлеккә ҡалдырабыҙ. Иртәгәһенә бойҙай әҙер ҙә була. Уны һыуыҡтыста 5 көнгә тиклем һаҡларға мөмкин.

Мин үҙем бындай бойҙайҙан икмәк бешерәм. Ҡамырын шулай әҙерләйем: бойҙайҙы ит үткәргестән үткәреп, һыу ҡушып, сүпрә һалып әсетәм. Һунынан еткәненсә юғары сортлы он, тоҙ һалып баҫып, ҡамыр ҡалҡҡансы тағы ла ултыртып торабыҙ, шунан бешереп алабыҙ. Икмәге шундай тәмле була!

**Г. МИҢЛЕБАЕВА.**
**Әбйәлил районы Туйыш ауылы.**

## Бесән кәбәгенән ванна

Бер кило бесән кәбәген киндер тоҡҡа һалынған көйө ҙур һауытҡа ултыртып өҫтөнә һалҡын һыу ҡойҙаҫ, талғын ғына итеп ярты сәғәт ҡайнатырға. Тоҡто алып ташлағас, һыуын ванналағы 37 градус йылылыҡтағы һыуға өҫтәргә. Ваннаны йөрәге насар кешеләргә көн аша, йөрәге һау булғандарға көн һайын 5-20 минут алырға. Бесән кәбәге эфир майҙарына бай, ваннанан һуң ҡан йөрөшө шәбәйеп, тән тонусы күтәрелә, матдәләр алмашыныуы көсәйә. Бесән кәбәге эске ағзаларҙы ла таҙарта, бауырҙағы ҡом, бәләкәй таштар сыға, бөйөрҙә, быуындарҙа йыйылған тоҙҙар ҡыуыла. Бындай ваннаны көмендә 10 тапҡыр инергә һәм был көндәрҙә күберәк шыйыҡса эсергә кәңәш ителә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ *Һуңғы биш йыл эсендә миңә берәү ҙә бер ниндәй теманы көсләп таҡманы. Минең өсөн бер генә заказсы бар - ул да булһа, минең уҡыусыларым, битараф булмаған кешеләр.*



ДӘҒҮӘСЕ ҺҮҘЕ

# КӘЛӘШ, ФЕНОЛЛЫ "АҠ ҠАЛАС" ҺӘМ ИНТЕРНЕТ,

## йәки Журналистиканың бөгөнгөһө һәм иртәгәгеһе хаҡында уйынлы-ысынлы яҙмалар

(Башы 3-сө биттә)

Ошолайтып яҙҙым да, уйға баттым. Киттем микән? Ай-һай! Тәүҙә "Теге донъя тауыштары"н тыңлаусы һәм уҡыусыларға еткереүсе булдым. Артур өйөнән ҡолаҡсынлы радиоалғыс килтерҙе. Мин, төн етһә, ятаҡта "теге донъя тауыштары"н, йәғни сит илдәрҙән беҙгә урыҫ телендә тапшырыуҙар алып барған "Азатлыҡ", "Азат Европа", "Азат Америка", "Немец тулҡыны" һәм башҡа ҡайһы бер радиостанцияларҙың яңылыҡтарын тыңлайым, яҙып алам, тәржемә итәм һәм иртәнсәк редакцияға килтерәм. Интернетты арҡырыһын-буйын гиҙеп үҫкән йәш быуын аптырамаһын - ул ваҡытта Бөтә донъя селтәре беҙгә килеп етмәгән ине әле. Яҙғандарымда хаталар күп булғандыр инде, аҙна һайын планеркала апайҙарыбыҙ - Гөлсимә Ризуанова, Зәйтүнә Ханова, Рәсимә Әлмөхәмәтова, Йомабикә Ильясова, Тамара Юлдашевалар ҡулдарына ҡып-ҡыҙыл итеп сыбарланған гәзиттәрен алалар, һәр бер хатаны анализлайҙар, береһен дә төшөрөп ҡалдырмайҙар. Оятлы итәләр. Төшөп юғалыр өсөн берәй тишек булмаҫ микән, тип иҙәнгә генә ҡарап ултырам.

Шулайтып, яҙыша башланым инде. Тәүге интервью һаман да хәтерҙә. Зөфәр Еникеев менән булды ул. Редакцияла 11 октябрь - суверенитет иғлан ителгән көнгә махсус һан әҙерләйҙәр. Мөхәррир менән уның урынбаҫары Рәшиҙә Лотфуллина саҡырып алдылар ҙа "Аҡ йортҡа бар, Зөфәр Еникеевты тап һәм уның менән интервью эшлә. Иң мөһиме, тел тураһындағы закон ҡасан ҡабул ителәсәк, шуны ныҡлап һора. Был һорауға яуап алмайынса ҡайтма", - тип ҡаты итеп әйтеп оҙаттылар. Киттем. Башта бер генә һорау ҙа юҡ, сурт та юҡ. Нисектер, Аҡ йортҡа барып еттем. Зөфәр Иргәли улын эҙләп таптым. Кабинетына инеп ултырҙым. Ағай, тим, эшкә алғандарына бер аҙна, һеҙҙең менән интервью ғүмеремдә тәүгеһе, һуңғыһы булыуы ла бик ихтимал, ярҙам итегеҙ инде. Зөфәр ағай ситуацияны дөрөҫ һәм тиҙ генә аңланы. Һорауҙарын да үҙе бирҙе, уға яуаптарын да үҙе ҡайтарҙы, ә мин яҙып ҡына алдым. Шулайтып, өсмө-дүртме һорау һәм уларға яуап әйтеп тороп яҙҙырҙы. Иншаларығыҙ былайыраҡ торһон! Ҡапыл мөхәррирҙең, тел тураһындағы закон хаҡында белешмәйенсә тороп, ҡайтып йөрөмә, тигән иҫкәртеүе иҫкә төштө. "Зөфәр ағай, ә тел тураһында закон ҡасан ҡабул ителер икән?", тип ауыҙ асырға баҙнатсылыҡ иттем. Оһо, ҡустым, бигерәк тиҙ өйрәнәһең, "тешләшә" башлаңың түгелме, ти депутат. Шулай ҙа ул һорау ҙа яуапһыҙ ҡалманы.

### Журналистың кәрәге ҡалырмы?

Үткән йылдар эсендә журналистикала күп нәмәләр үҙгәрҙе. Ҡәләм менән аҡ ҡағыҙға яҙып ултырыусылар бик һирәктер хәҙер - компьютер баҫып алды бар донъяны. Ручка тотоп, биш минут та яҙа алмайым икән - күптән түгел шуны аңланым. Мәғлүмәтле булыу йәһәтенән дә артыҡ күп нәмә кәрәкмәй - Бөтә донъя селтәренә тоташһаң, шул етә. Кәрәкле мәғлүмәт ҡул алдында. Кәрәк булмағаны иһә, күҙҙе тишеп, ҡолаҡты ярып инеп китеп бара. Совет осорондағы ябыҡлыҡ, мәғлүмәт етешмәү артыҡ мәғлүмәтлелек менән алмашынды. Бөгөн мәғлүмәт беҙҙе бөтә яҡтан да солғап алған дарья кеүек. Иртәнән алып кискә хәтлем беҙ уның тулҡындарында бәүеләбеҙ. Кемдер унда балыҡ кеүек йөҙөп йөрөй, мәғлүмәтте ҡабул итеп кенә ҡалмай, уның менән оҫта файҙалана һәм эшен эшләй, ә кемдер уның артыҡна тонсоға, мәғлүмәт диңгеҙендә бата башлай һәм ахыр сиктә уға битараф ҡарай. Ә был иһә тормоштан артта ҡалыу тигән һүҙ.

Был проблемаға икенсе күҙлектән ҡарайыҡ. Кешегә ошо мәғлүмәт тулҡыны кәрәкме? Кәрәк булһа, ни өсөн? Кеше ошо ағымды көйләргә, үҙенә кәрәкте генә һайлап алырға, кәрәкһеҙ мәғлүмәтте иғтибарға алмаҫҡа һәләтлеме? Әллә уға ярҙам итергә кәрәкме? Уҡыусыға "ярҙам" ҡулы һуҙыу, йәғни теге йәки был критерий буйынса һайлап алынған мәғлүмәтте тәҡдим итеү менән цензура бер үк нәмә түгелме?

Бөгөн Рәсәй журналистикаһы, шул иҫәптән башҡорт журналистикаһы ла - юл сатында. Ҡайһы юл менән китергә? Уҡыусыларға тулы һәм оператив мәғлүмәт биреү менән генә сикләнергәме? Әллә уларҙың ҡайһы берҙәрен "сәйнәп ҡаптырырғамы"? Тағы ла бер проблема килеп баҫа. Ул айырыуса ҡағыҙҙа донъя күргән баҫмалар, йәғни, гәзит-журналдар өсөн мөһим. Кешеләр бөгөн информацияны төрлө сығанаҡтарҙан ала. Улар араһында Интернет көндән-көн ҙурыраҡ урын биләй. Ундағы информация бушлай тиерлек (компьютер һатып алыу, Интернетҡа тоташыу һәм айлыҡ абонент хаҡын түләп барыуҙы иҫәпкә алмағанда, әлбиттә). Бынан тыш, унда кеше үҙе теләгән мәғлүмәтте таба ала. Теләк һәм ваҡыт ҡына кәрәк. Гәзит-журналдарға иһә ярты йыл һайын яҙылып тороу мотлаҡ. Уларҙы почта йәшнигенән урлап алып китеүҙәре ихтимал. Әлбиттә, Интернеттың да уңайһыҙ яҡтары бар. Компьютерҙы, мәҫәлән, диванда ҡосаҡлап ятып булмай. Уны биткә ҡаплап, серем итеп алырға ла мөмкин түгел.

Шулай итеп, яҡын киләсәктә беҙҙе интернет-журналистика көтәме? Юҡ, ул Бөтә донъя селтәренең бөгөнгө көнө. Һүҙ мәғлүмәт туплауҙа, системалаштырыуҙа һәм һаҡлауҙа махсуслашҡан интернет-порталдар хаҡында ғына бармай. Интернет менән даими ҡулланырға мөмкинлеге булған һәр бер кеше бөгөн үҙен журналистикала һынап ҡарай ала. Махсус сайтта "блог", йәғни интернет-көндәлек асыу ғына шарт. Унан һуң инде, теләһә ниндәй яңылыҡты ал да, үҙ фекереңде белдер. Әйткәндәй, был эш өсөн яуаплылыҡҡа тарттырыуҙары ла ихтимал. Сентябрь башында ғына Сыктывкар ҡала суды үҙ блогында урындағы чиновниктарҙы торлаҡ менән һатыу итеүҙә ғәйепләгән блоггер Игорь Сажинға 6 мең һумлыҡ штраф һалды. Һәм был бер генә миҫал.

Ә киләсәктә иһә (күҙ алдығыҙға ғына килтерегеҙ!) һәр бер кеше үҙенең шәхси гәзитен сығарыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Бының өсөн уға артыҡ бер нәмә лә кәрәкмәйәсәк, әлеге лә баяғы компьютер, Интернет, принтер (баҫтырып сығарыр өсөн, ә төҫлө булһа, гәзит тә төҫлө сығасаҡ) һәм Интернеттан теләгән мәғлүмәттәрҙе һәм фотоһүрәттәрҙе алып, версткалап, принтерға оҙатҡан махсус программа. Һәр көн һайын (ялһыҙ-ниһеҙ, әлбиттә) һәр бер кеше үҙе теләгән яңылыҡтарҙан һәм башҡа төрлө материалдарҙан торған, уның өсөн генә, бер генә данала эшләнгән гәзитте уҡый аласаҡ.

Йәғни, ҡағыҙ баҫмалар менән хушлашырға әле иртәрәк булып сығамы? Интернет барлыҡҡа килгәс, гәзиттәр юҡҡа сығасаҡ, тигән фараздар яңылыш, тимәк? Әлбиттә. Гәзиттәр барыбер ҡаласаҡ. Кәмендә яҡындағы илле йыл эсендә уларға бер нәмә лә янамай. Ҡағыҙ кеүек арзан һәм еңел үтилләштереп була торған яңы материал уйлап сығарһалар, бигерәк тә. Интернетҡа компьютерҙан ғына түгел, кәрәҙ телефонынан һәм үтек, сәйнүк, һыуытҡыс һәм СВЧ-мейес аша сығырға мөмкин булған осраҡта ла. Ләкин был технологик сылбырҙа журналистың урыны ҡайҙа һуң? Ул ни эшләргә тейеш? Уның кәрәге ҡалмаясаҡмы? Әллә ул Интернетҡа мәғлүмәт тапшырып тороусы кешегә генә әүереләсәкме? "Ҡайҙа? Нимә? Нисек?" тигән һорауҙарға яуап биреүсе сифатында ғынамы?

Кеше бөгөн мәғлүмәткә мохтаж түгел. Ул уны тулы һыулы шишмәнән биҙрәләп һоҫоп алған кеүек рәхәтләнеп файҙаланыу мөмкинлегенә эйә. Уға бөгөн (һәм артабан да) мәғлүмәт менән тәьмин итеүсе түгел, ә уның менән һөйләшеүсе, әңгәмәләшеүсе, аралашыусы, уның фекерҙәрен уртаҡлашыусы, хатта бәхәсләшеүсе кәрәк. Донъяның глобаль бер системаға әүерелеүе (ә был процесс иҡтисадта ғына түгел, социаль мөнәсәбәттәрҙә лә бара) кешене яңғыҙлыҡҡа дусар итте. Кешегә бөгөн мәғлүмәт түгел, ә тормошҡа ыңғай ҡараш, фекер алышыу етешмәй. Ул үҙенең бихисап проблемалары менән яңғыҙы тороп ҡала. Хатта үҫешкән иҡтисадҡа эйә булған Көнбайыш Европа илдәрендә лә үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары кәмемәй, күбәйә генә икән. Кеше аҡса мәсьәләләрен, йәки торлаҡ проблемаларын сисә алмағанға түгел, ә яңғыҙ ҡалғанға был донъянан китергә ынтыла. Кеше социаль хайуан, уға мөнәсәбәттәр талап ителә. Төрмәлә лә бит иң ҡаты яза - бер урынлы камераға бикләп тотоу. Кеше ҡояшһыҙ, ашһыҙ, һыуһыҙ күпмелер түҙә ала, ә яңғыҙлыҡҡа - юҡ.

Бына тап ошо осраҡта уға ярҙамға журналист килергә тейеш. Мотлаҡ рәүештә гәзит биттәре аша түгел. Шул уҡ Интернет аша, радионан йәки телеэкрандан булыуы ихтимал. Әммә ул юғары кимәлдәге журналист булырға тейеш. Был донъялағы һәр бер ваҡиғаға, күренешкә, сәйәсәт өлкәһенән булһынмы ул, әллә иҡтисадтанмы, ә, бәлки, социумдағы (йәмғиәттәге) берәй хәл-ваҡиға булһынмы, журналист уға үҙенең фекерен белдерергә тейеш. Ул фекер башҡа кешеләрҙекенә оҡшамауы ихтимал. Хатта оҡшамаҫҡа, уларҙы ҡабатламаҫҡа тейеш. Был малаховтар, йәки малаховплюстар ише псевдожурналистар булырға тейеш түгел. Шул уҡ ваҡытта улар әлеге ваҡытта Көнбайыш илдәрендә киң таралған психологик хеҙмәттәрҙән айырмалы рәүештә, кешене тыңлар өсөн генә тәғәйенләнгән булырға тейеш түгел. Һыуға һөйләгән һымаҡ бит ул. Киреһенсә, журналист үҙенең һүҙе, ғәҙәти яңғырамаған фекерҙәре менән яңғыҙлыҡтан аптырағандарға йәшәү көсө, яңы уңыштарға, ижади ҡаҙаныштарға ынтылыш бирергә бурыслы. Ундай журналист бер ҡасан да эшһеҙ ҡалмаясаҡ. "Журналист" тип аталасаҡмы ул һөнәр эйәһе, әллә башҡа берәй исем менән йөрөйәсәкме - билдәһеҙ.

### Барыһын да үҙем белгәнсә яҙам

Минән йыш ҡына "Аҙна шаңдауы"ндағы материалдар тураһында һорайҙар. Үҙ белдегең менән яҙаһыңмы, әллә берәй кеше алдан заказ бирәме, тип тә, темаларҙы үҙең һайлайһыңмы, әллә берәй кеше әйтеп торамы, тип тә, ҡайһы ваҡытта бигерәк "әсе" тешләшәһең, артыңда берәй ойошма, йәки йоғонтоло берәй шәхес торамы, тип тә. Бөтә ошо һорауҙарға бер юлы яуап бирергә кәрәктер, тип уйлайым. Һуңғы биш йыл эсендә миңә берәү ҙә бер ниндәй теманы көсләп таҡманы. Кемдер миңә өҫтән (йәки аҫтан) шылтыратып, теге йәки был ваҡиғаны яҡтыртырға заказ бирмәне. Президент Мортаза Рәхимов тураһында ла, экс-Президент Владимир Путин тураһында ла, Президент Дмитрий Медведев хаҡында ла мин үҙ белдегем менән яҙҙым. Һәм яҙасаҡмын. Минең өсөн бер генә заказсы бар - ул да булһа, минең уҡыусыларым, илдең, республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың бөгөнгөһөнә, киләсәгенә битараф булмаған кешеләр.

"Аҙна шаңдауы"н уҡыусыларҙың бөтәһе лә минең фекерҙәр менән ризалашалыр, тип уйламайым. Һәм шуға ҡыуанам. Беҙ бит бер фекерле, бер уйлы, бер партиялы, бер башлыҡлы, бер төрлө кейемле илдән сыҡҡан кешеләр. Беҙ хәҙер төрлөсә уйларға, фекер йөрөтөргә, бәхәсләшергә өйрәнәбеҙ генә. Был бер-ике йыллыҡ, бер-ике тиҫтә йыллыҡ ҡына процесс түгел. "Берҙәм Рәсәй" партияһының Дәүләт Думаһында күпселек йыйып, күп кенә ҡанундарҙы бер яҡлы итеп ҡабул итеп ултырыуы быға ишара. Күп партиялылыҡ шарттарында бер партия менән йәшәйбеҙ, тигән һүҙ был. Шуға ла беҙ тәүҙә үҙебеҙ фекер төрлөлөгөнә өйрәнеп, артабан власты тотоп тороусыларҙы ла шуға өйрәтергә бурыслыбыҙ. Юғиһә, беҙ йәмғиәт булмаясаҡбыҙ. Көтөү генә булып ҡаласаҡбыҙ.

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЫУАТҠА БЕР ТЫУҒАНДАР*

# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ -

## башҡорттоң бөйөк әүлиәһе

**"Аллаһ теләгән кешеһенә хикмәт бирә, ә кемгә хикмәт бирелгән - уға ҙур изгелек тә бирелгән. Ләкин быны аҡыл эйәләре генә иҫендә тота."**

*"Әл-Бәҡара" сүрәһенең 269-сы аяты.*

Халҡыбыҙҙың оло мөхәббәтен яулаған, халыҡ хәтеренә исеме алтын хәрефтәр менән уйылып яҙылған дин әһеле, әүлиә Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улы тураһында уйлана башлаһаҡ, бер нәмәгә хайран ҡалабыҙ: уға булған оло ихтирам, уның шәхесе менән ҡыҙыҡһыныу йылдар үткән һайын баҙыҡая, нығыраҡ арта бара.

Мөжәүир хәҙрәттең исеме бер ниндәй махсус хәтерләүҙәргә мохтаж түгел. Тыуыуына - 133, изге йәне әхирәткә күсеүгә быйыл йәй 42 йыл тулып үтте, ә уның хикмәттәрен, ҡылған яҡшы эштәрен, әйтеп ҡалдырған өгөт- нәсихәттәрен кешеләр телдән төшөрмәй һаман һағынып һөйләй.

- Мин Ҡөрьән сығам да хәҙрәт олатай рухына бағышлайым,- тине бер осрашҡанда Разия апай. Хәҙрәт рухын шат ҡылыр өсөн Ҡөрьән сығып бағышлауҙары тураһында аҙаҡ та күп кешеләрҙән ишетергә тура килде. Хатта ҡәберенә барып, аҙна буйы ашамай-эсмәй Ҡөрьән уҡып ултырыусы суфыйҙар менән осрашҡаным булды. Бик күптәр намаҙ ваҡыттарында уны иҫкә алып, рухына доғалар бағышлай. Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр яҡтарында, Сибай ҡалаһында әле лә һәр өйҙә, һәр ғаиләлә тиерлек уның исеме менән бәйле яҡты хәтирәләр һаҡлана, уның яҙып биргән бетеүҙәрен, өшкөрөп биргән тоҙон күҙ ҡараһындай күреп һаҡлайҙар.

Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улының (1876 - 1967) бөтә ғүмере Баймаҡ районының "Йылайыр" совхозына ҡараған йәмле Урғаҙа буйындағы Манһыр ауылында үтә. Шунда тыуа, йәшәй, 91 йәшендә гүр эйәһе булып, ошо ауыл зыяратында ерләнә.

Тыуыуына 133 йыл үтеп киткәнлектән, Мөжәүирҙең бала сағы тураһында белеүселәр юҡ кимәлендә. Әммә ил хәтере икһеҙ-сикһеҙ дарья кеүек икән. Телдән-телгә күсеп, быуындан-быуынға тапшырылып, барыбер иң мөһим мәғлүмәттәр беҙҙең көндәргә килеп еткән. Сибай ҡалаһында йәшәүсе ҡулынан Ҡөрьәнен төшөрмәгән ағинәй - Булатова Фирҙәүес Шаһимырҙан ҡыҙының күңел түрендә хәҙрәт-олатайҙың бала сағы тураһында бай хәтирәләр һаҡланыуы асыҡланды. Буласаҡ әүлиә Фирҙәүес апайҙың әсәһе, ирҙәрсә сая холоҡло, үткер, тәбиғәттән төплө аҡыллы Нәзилә Биишеваны бик ихтирам итә, күп кенә серҙәрен, мәсәлән, бала сағында күктән өҫтөнә йәйғорҙоң осо төшөү мөғжизәһен, уға һөйләп ҡалдырған. Аҙаҡ хикмәт эйәһенең хикмәттәрен Нәзилә Фирҙәүес ҡыҙына бөйән итә. 1887 йылдарҙа, Мөжәүиргә ун бер йәштәр тирәһе булғанда, Манһырға Зәйнулла ишандың килеүе, уны өлөшлә бала тип атауы, Ғабдулла Сәиидигә һәм мәҙрәсә тотҡан башҡа хәҙрәттәргә баланы мотлаҡ уҡытырға ҡушыуы тураһында ла ул һөйләп ҡалдыра.

Арабыҙҙан китеүенә байтаҡ йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, Мөжәүир хәҙрәттең артабанғы ғүмер миҙгелдәре тураһында бөйә-бөйә һөйләүселәр бихисап. Кәримова Хәҙисә, Ҡәҙерғолова Үлмәсбикә, халыҡ табибы Байгилдина Нурия, Бүләкова Рәйсә (ҡартәсәһе Көмөшҡолова Гөлъямал хәтирәләрен тергеҙә), Хәбирйәнова Роза, Мәхмүтова Зәйнәп, Иҙрисова Миңлеямал, Иҙрисов Байтүрә, Сиражетдинов Зәйнулла, Кунаева Гөлдәр, Баймөхәмәтова Разия, Хәсәнова Фәйрүзә, Туҡаев Мөхәмәтйәр, ирле-ҡатынлы Ашырбаевтар һәм башҡа йөҙәрләгән кеше уның тураһындағы яҡты хәтирәләрен күңел түрендә һаҡлай.

Хәҙрәтте яҡындан белгән, хәҙерге ваҡытта Байыш ауылында йәшәгән **Кәримова Хәҙисә апай**, "Һүҙҙәрем бер ваҡыт алтын бәрәбәренә булыр әле" тип йыш ҡабатлауы тураһында хәтерләй, уның бик ярҙамсыл, туған йәнле, әңгәмәсел, асыуланыуҙың ни икәнен белмәгән, алсаҡ, һүҙен үлсәп һөйләргә яратҡан тәрән аҡыл эйәһе булыуын әйтә. "Йылайыр" совхозында йәшәүсе Байназарова Зәкиә апай уның төҫ- башын ошолай тасуирлай: "Дәү, мыҡты кәүҙәле, аҡ сырайлы, эс-бауырында ниҙәр ятҡанын үтә күрерҙәй үткер ҡарашлы, йәшкелт- көрән күҙле ине".

**Ҡәҙерғолова Үлмәсбикә апай** хәтирәләре айырыуса ҡыҙыҡлы. Тәү тапҡыр барыуы тураһында быны нимәләр һөйләй ул:

-Бөтә кеше Мөжәүир хәҙрәттең иҫ киткес һәләтлектәренә хайран ҡала. Мин дә барып күрергә булдым. Берҙән-бер һыйырымды һаттым, аҡсаһын хәйерлеккә тип кеҫәмә һалып алдым, Ғәбдинур улымды етәкләнем. Бара торғас, улым арыны, уны күтәреп алдым. Ауылға етеп булмай ҙа ҡуя, хәл бөттө. Әйтәләр ине, хәҙрәттең әбейәты бар тип. Олатай беҙгә шул әбейәтын ебәрһә ярар ине, тип киләм. Шул саҡ ҡаршыға бер әбей килеп сыҡты ла улымды елкәһенә ултыртып та алды. Миңә эйәрергә ҡушты. Олатай беҙҙе көләп- шаяртып ҡаршы алып тора:

- Һыйыр һынлы һыйыр һатып, аҡсаһын кеҫә тултырып һалып алғас ни, атлауы ауырҙыр шул,- ти.- Арыҡ һыйырҙың күтәне киң, ярлы кешенең күңеле киң.



Бер тин дә хәйер, мең тин дә хәйер. Ана, кеҫәң төбөндә ҡыҫылып, бер тин ята бит, миңә шуны алып бир.

Шулай итеп, кешенең ҡайһы юҫыҡтан ни уйлап килерен алдан белеп торған, барыһын үтә күргән хәҙрәт үҙенең күрәҙәлеге, кәрәмәттәре менән Үлмәсбикәнең һушын ала.

Мөжәүир хәҙрәт өс рәт өйләнә. Барлығы ун дүрт балаға атай була. Һуңғы ҡатыны ун бала әсәһе Гөлйемеш абыстайҙы кешеләр яҡшы иҫләй. Ҡаҙанында ашы бешеп, самауыры ҡайнап ултырыр, хәҙрәттең күҙенә генә ҡарап торор, һәр әйткәнен үтәр ине, тиҙәр. Ҡап-ҡара ҡашлы, ап- аҡ йөҙлө, мыҡты кәүҙәле сибәр ҡатын була Гөлйемеш.

Йылдар үтә. Бөгөн ун дүрт баланан берәүһе, иң кесеһе, иҫән. Ул 1945 йылда тыуған, хәҙерге көндә Сибай ҡалаһында йәшәүсе Сиражетдинов Мөхәммәт Мөжәүир улы. Белеүселәрҙең бәғзеләре был олпат кәүҙәле, төҫкә-башҡа таҙа, айыҡ аҡыллы, баҫалҡы ирҙе атаһына, икенселәре әсәһенә оҡшата. Үҙ ваҡытында ауыл хужалығы институтын тамамлаған, ветеринария врачы һөнәре алған, һайлаған һөнәре буйынса оҙаҡ йылдар эшләп, инде хаҡлы ялға сыҡҡан Мөхәммәтте Сибай, Баймаҡ яҡтарында яҡшы беләләр. Олатайҙан ҡалған ҡомарҡлыҡай күреп, уға ихтирам һәм һөйөү менән ҡарайҙар.

- Бала саҡ хәтирәләренән, иң беренсе, ҡайһы бер кешеләрҙең, бигерәк тә уҡытыусыларҙың, беҙҙе мулла балаһы тип ситләтергә тырышыуҙары иҫтә ҡалған,- ти ул. - Ураҙа тотмайбыҙмы икән, тип бөтә класс алдында һыу эсереп ҡараһындармы, намаҙ уҡымайбыҙмы икән, тип йәшеренеп өйгә килеп тикшерһендәрме - ҡыйын була торғайны. Ошо хәл атайыбыҙҙы дөрөҫ баһаларға ҡамасаулағандыр, күрәһең. Үҫә төшкәс, мин уның ябай кеше булмауын аңланым. Көндәр буйы һәр бер килгән кешенең аһ- зарын тыңлау, барыһына ихлас ярҙам итеү өсөн ниндәй оло йөрәкле, кеше йәнле, сабыр булыу кәрәк. Атайымдың: "Миңә юғарынан шулай ҡушылған, ерҙәге бурысымды атҡарам. Бөтәһе лә Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн",- тигән һүҙҙәренең мәғәнәһен дә тик хәҙер генә аңлайым.

Сибай ҡалаһында йәшәүсе яҙыусы Тимерғәле Бүләков Мөжәүир хәҙрәтте "Башҡорт Мессингы" тип атай. Болгарияның бөтә донъя белгән халыҡ табибы, күрәҙәсе бөйөк Ванга ерләнгән Рупите ҡалаһындағы Изге Петка тигән урын шау сәскәгә күмелгән. Ниңә беҙ ҙә Мөжәүир хәҙрәт ерләнгән урынды, Хөкүмәт ҡурсаулығына алып, сәскәләргә күммәйбеҙ, әүлиә ҡәберенә зыярат ҡылырға тип, йыраҡтан килеүсе мосафирҙар өсөн тейешле шарттар, экскурсия пункты булдырмайбыҙ?

Үҙебеҙҙең хәҙрәтебеҙҙең Аллаһы Тәғәләнән бирелгән ҡөҙрәтен Вангаһыҡы менән сағыштырып ҡарайым. Уларға юғарынан бер иш илаһи көс-ҡөҙрәт бирелгән, тигән фекергә киләм. Ә ниңә беҙ, башҡорт халҡы, бөтәбеҙ һөйөп зурлаған бөйөк шәхесебеҙҙе Ванга кимәленә күтәреп хөрмәтләй алмайбыҙ? Ниңә ихтирамыбыҙҙы күрһәтеүҙән тартынабыҙ? Әүлиә тере сағында әйтеп ҡалдырған: "Үлгәндәргә хөрмәт бөтһә, тереләргә лә һан ҡалмаҫ. Онотмағыҙ, милләттең дәрәжәһен уның изге рухлы кешеләре билдәләй",- тигән.

Иҫке Сибай ауылында йәшәүсе **Разия Баймөхәмәтованың** хәтер һандығында Мөжәүир хәҙрәт исеменә ҡағылышлы уникаль мәғлүмәт һаҡланған булып сыҡты. Италиянан килгән был хат тураһында элек тә бер ишетеп ҡалғайным, ләкин осона сыға алмай ҡуйғайным. Әле Разия апай уны кем ауыҙынан ишеткәнен, хатҡа нимә тураһында яҙылғанын энәһенән-ебенә тәфсирләп һөйләп бирҙе.

Мөжәүир хәҙрәттең изге йәне, баҡый донъяға күсеп, бер нисә йылдар үтеп киткәс, 1970 йылдарҙа, Баймаҡ райкомының беренсе секретары исеменә Италияның Рим папаһынан хатмөрәжәғәт килеп төшә. Был хатта Италия руханиҙарының Мөжәүир хәҙрәтте белеүҙәре, донъя кимәлендәге бөйөк шәхес тип таныуҙары, уның бөйөк ыҙа сигеүсе булыуы /великомученик/ тураһында әйтелә һәм изге әүлиә Мөжәүир Уйылдан улы йәшәгән төбәкте һәм уның бөтә тирәяғын, йөҙ километр радиус менән, дәүләт заказнигы итеп һаҡлау кәрәклеге тураһында белдерелә. "Һеҙҙең халыҡ бик мөғжизәле урында йәшәй. Ерегеҙ бай, тәбиғәтегеҙ хозур, халҡығыҙҙың киләсәге яҡты,"- тиелә хатта.

Тере сағында, Мөжәүир әүлиә туған халҡы һәм ер йөҙө халҡы өсөн бөйөк ыҙа сигеүсе булды, тип яҙа Италия руханийы. Йәнә хатта ошондай юлдар була: "Мөжәүир әүлиәнең йәне ерҙән киткәс, изге рухы үҙе йәшәп киткән төбәккә генә түгел, бөтә планетаға бәрәкәт, именлек ебәреп ятыр". Рим папаһы үҙенең был хатында изге дин әһеле йәшәгән ерҙәрҙе халыҡ күҙ ҡараһындай һаҡлаһын ине, ти.

Был ҡыҙыҡлы хат тураһында беҙ Разия Хәйбулла ҡыҙы менән оҙаҡ фекер алыштыҡ. Күп йылдар элек ул быны үҙ ҡолағы менән мәрхүм **Сырлыбаев Рәхмәтулланан** ишетә.

- Был хат тураһында киләсәк быуын белергә тейеш. Хат, бәлки, берәй архивта яталыр. Уны эҙләп ҡарарға кәрәк. Бәлки, шул саҡтарҙа райкомда секретарь-машинистка булып эшләгән кеше беләләр,- тине Разия апай.

Эйе, партия нисек кенә тыйһа ла, закон динде инҡар итһә лә, Мөжәүир хәҙрәтте төрмәләргә ултыртып ҡуйһалар ҙа, беҙҙең яҡтың һәр кеме, кеҫәһенән алып олоһона тиклем, Мөжәүир хәҙрәтте белде, яратты, ихтирам итте. Гел уйлай торғайным, шундай ҙа илаһи ҡөҙрәт эйәһе нисек үҙен ҡулға алырға, төрмәләрҙә ултырыуға юл ҡуйҙы икән, тип. Баҡһаң, был уның туған халҡы өсөн ыҙа сигеүе, тәҡдиргә буйһоноуы булған. Шуға ул күндәмлек күрһәткән булып сыға. Икенсенән, быуна ни өсөн Манһыр тирәһен һөрөргә тип килгән тракторҙар боҙолоп ултырған. Кире ҡайтыр булһалар, бөтә кешене аптыратып, һин дә мин эшләп киткән. Тимәк, бынан шуны аңларға була, олатай рухы еренең соҡолоп, тәләфләнеп ятыуын теләмәгән. Был да юҡҡа түгел. Мөжәүир әүлиә йәшәгән изге ерҙәргә юғарынан ҡул тейгеҙергә ҡушылмаған.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**

**Әйткәндәй, Өфөләге зыялылар 26 сентябрҙә Мөжәүир хәҙрәткә зыярат ҡылырға йыйына.**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# УРАҘА ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

Ураҙа ғәйете - шәүүәл айының беренсе көнө. Ул әһәмиәте менән Ҡорбан ғәйетенән ҡала икенсе урында торған оло байрам. Был көн рамаҙан айында бер ай буйы ураҙалар тотоп, Аллаһы Тәғәләнең бер фарызын үтәй алыуыбыҙға шатланып байрам иткән көн. Ураҙа тотоп, тәндәребеҙҙе таҙартып, сәләмәтләнеп, пакланып, еңеләйеп ҡалыуыбыҙға, иманыбыҙ артыуына, ризыҡтың, һыуҙың тәмен башҡаса аңлай башлап, ғүмерҙең дә ҡәҙерен белергә өйрәнгәнгә шатланып туя алмаҫ көн был.

Байрам көндәре - бөтә кешеләр араһында ҡәрҙәшлекептәре нығынған көндәр. Был көндә бер-береһенә асыуланышҡандар яраша, дуҫтар дуҫлыҡептәрен нығыта, туғандар һәм күршеләр бер-береһенә ҡунаҡҡа бара, балалар ата-әсәләренең ҡулдарын үбә, ата-әсәләр уларҙы иркәләп һөйә, кешеләр бер-береһенең хәлен белешә... Бөтә балалар ҙа иң матур, таҙа кейемдәрен кейә. Шулай уҡ етем һәм ярлы ғаиләлә үҫкән балалар ҙа онотолмай. Уларға ла бүләктәр, күстәнәстәр таратыла.

Был көндә бер кем дә иғтибарҙан ситтә ҡалырға тейеш түгел. Был байрам көндә болоҡһоу күҙҙәр шатлыҡ сәсергә, ауырыуҙарҙа өмөт уяныр ға, йөрәктәрҙән моңһоулыҡ юғалырға тейеш.

Бер ай буйы мосолмандар Аллаһ ризалығы өсөн ураҙа тотто, үҙҙәренең ҡулдарын да, аяҡтарын да, күҙҙәрен дә, телдәрен дә гонаһтан һаҡланы, рухын нығытты, нәфсеһен кәметте.

Һәм бына байрам көнө лә етте. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте, мәрхәмәте кәмемәһен, ризыҡтарыбыҙ бәрәкәтле, донъяларыбыҙ имен, теүәл булһын! Амин!

✓ *Быйыл да беҙ хаҡтарҙы арттырманыҡ, хатта ҡайһы бер һөнәрҙәргә һәм ситтән тороп уҡыу бүлегендә уҡыу өсөн түләү хаҡтарын 20-40 процентҡа кәметтек.*



# БЕР ЮҒАРЫ

## милләттең тормошон

**Гәзитебеҙҙең быйылғы 11-се һанында Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты директоры, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Зиннур ЙӘРМӨХӘМӘТОВтың "Тәртип шәп бында, ә тәртипле студент белемде һоҫоп ала" тигән сығышы баҫылып, унда Рәсәй кимәлендә киң билдәлелек яулаған ошо уҡыу йортоноң уңыш серҙәре хаҡында һүҙ барғайны. Әле яңыраҡ тағы ла Сибайҙа булып, Зиннур Ғөбәйҙулла улы менән осрашып, институт тормошо, уның проблемалары хаҡында тағы ла фекер алыштыҡ. Әңгәмәлә Башҡорт дәүләт университеты Сибай институты директорының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары Вәкил Исмәғил улы ХАЖИН да ҡатнашты.**

**Хәҙерге ваҡытта донъяла барған иҡтисади көрсөк арҡаһында юғары уҡыу йорттары алдына "Нисек һаҡланып ҡалырға?" тигән һорау килеп баҫты. Юғары уҡыу йорттары иҫәбен ҡыҫҡартыу, ҡайһы берҙәрен берләштереү хаҡында ла һүҙ йөрөй. Был йәһәттән һеҙҙең институт, үҙен һаҡлап ҡалыр өсөн, ниндәйерәк саралар күрә?**

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Беҙҙең алда был һорау әллә ни ныҡ тормайҙыр, сөнки беҙ элек-электән Рәсәй Федерацияһында иң түбән хаҡҡа уҡытып килдек. Беҙҙә бюджет урындары күп түгел - 268 урын, шуның 170 урыны - Башҡортостандыҡы, 98 урыны - Рәсәй Федерацияныҡы. Ҡалған студенттарыбыҙ түләп уҡый. Быйыл да беҙ хаҡтарҙы арттырманыҡ, хатта ҡайһы бер һөнәрҙәргә һәм ситтән тороп уҡыу бүлегендә уҡыу өсөн түләү хаҡтарын 20-40 процентҡа кәметтек, һәм был саралар әллә ниндәй ҙур проблемалар тыуҙырманы. Электән үк юрғаныбыҙға ҡарап аяғыбыҙҙы һуҙып өйрәнгәс, иҡтисади көрсөк әлегә аяҡтан йығырлыҡ хәлгә еткермәне. Шулай ҙа студенттарҙың матди хәле насарайыуын тойорға була. Быйыл бына 1200 студент, былтырғы уҡыу йылы өсөн түләүҙе кисектереп тороуҙы һорап, ғариза яҙҙы. Бындай хәл беҙҙең институт тарихында булмай торғайны. Булған аҡсабыҙ уҡытыусыларҙың эш хаҡын һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙән артмай. Институтты үҫтереү өсөн финанс мөмкинлектәребеҙ бөтөнләй юҡ кимәлендә. Икенсенән, закон тарафынан бер ниндәй ҙә ташламалар юҡ, хәҙер ер өсөн һалым артты. Уҡыу йорттары өсөн ергә һалым ни өсөн шулай күптер, быны аңлай алмайбыҙ. Ҡыҫҡаһы, сығымдарыбыҙ артты, ә килемебеҙ кәмене. Элекке йылдар менән сағыштырып ҡарағанда, хәлебеҙ мөшкөлөрәк, шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ элек-электән дә һәр бер тинде институтты үҫтереүгә йүнәлтеп торғас, булған базабыҙҙы элекке кимәлдә әлегә һаҡлап киләбеҙ.

**В. ХАЖИН:** Зиннур Ғөбәйҙулла улы әйткәнсә, ситтән тороп уҡыу бүлегендә уҡыу өсөн түләүҙе ныҡ кәметтек. Көндөҙгө бүлектә лә ҡайһы фәндәр буйынса хаҡ кәмене. Мәҫәлән, биология буйынса. Былтыр бер йылға 25 мең ине, ул саҡта ла көләләр ине беҙҙән, быйыл иһә уны 15 меңгә тиклем кәметтек. Сағыштырыу өсөн: Мәскәү дәүләт университетының биология факультетында бер йылға түләп уҡыу хаҡы 220 мең тора, йәғни беҙҙекенә ҡарағанда теп-теүәл 15 тапҡырға күберәк.

Аҡса экономиялауҙың техник мөмкинлектәрен дә файҙаланырға тырышабыҙ. Әйтәйек, китапханаға китаптар һатып алыр өсөн аҡсаны кәметәбеҙ икән, уның урынына электрон китаптар, дәреслектәр менән файҙаланыуҙы күҙ уңында тотабыҙ. Институтыбыҙҙың Интернет селтәренә тоташҡан булыуы ла беҙгә быны эшләргә мөмкинлек бирә. Был осраҡта студенттарыбыҙ беҙҙә генә түгел, хатта Рәсәйҙән ситтәге китапты ла таба аласаҡ. Әле беҙҙә компьютер кластары 12, тиҙ арала уларҙың һанын 20-гә еткерергә исәп тотабыҙ. Әле уҡыу корпустарына "Юлдаш" антенналары ҡуйырға итәбеҙ. Уларҙа уҡыу программалары бар. Был программалар бер үк ваҡытта меңәрләгән китапты алмаштыра ала. Бына ошондай осһоҙораҡ юлдар менән нисек булһа ла уҡыуҙың сифатын күтәрергә тырышабыҙ.



*Ауылдан ҡалаға килеүсе йәштәргә, әгәр ҙә дөрөҫ йүнәлеш бирмәһәң, уларҙы күҙ уңынан ысҡындырһаң, шул уҡ баҙнатһыҙлыҡ тиҙ арала битһеҙлеккә, оялыу оятһыҙлыҡҡа ла әйләнеп китеүе бар. Шуға күрә беҙ бында ауылдан килеүсе студенттарҙы, үҙебеҙҙәге яңы йәшәү шарттарына күнектергәндә, улар тыуып үҫкән, мәктәптә белем алған ауыл мөхитенең күркәм күренештәрен дә үҙебеҙгә күсерәбеҙ. Шуларҙың тәүгеһе һәм иң мөһиме - һаулыҡ һорашыу, икенсеһе - матур итеп кейенеп йөрөү, эсмәү һәм тартмау, аҡырып-баҡырып һөйләшмәү һ.б.*

**Элегерәк "Юғары уҡыу йорто белемде бирмәй, унан белемде алалар", тигән һүҙ бар ине. Һеҙ институтта, студенттарығыҙға белем биреүҙән тыш, тағы ла ниндәй сифаттар тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйғанһығыҙ?**

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Элегерәк мәктәптә илтибар үҙгәнә һәм өлгә итеп тик "бишле" билдәһенә өлгәшеүсе уҡыусылар ғына ҡуйыла торғайны. Ғәмәлдә иһә шәхестәр иғтибарҙан ситтә булыусылар араһынан сығыусан. Ошоларҙы иҫкә алып, беҙ студенттарыбыҙға белем биреүҙән тыш, уларҙы үҙҙәренең һайлаған һөнәре буйынса эшләргә лә өйрәтәбеҙ. Дәүләт белем биреү стандарттарында практика 4-5-се курстарҙа булыуға ҡарамаҫтан, беҙ практиканы икенсе семестрҙан уҡ башларға итәбеҙ. Төп уҡыуҙан тыш ваҡытта "Студенттарҙың үҙ аллы эше" тигән графаға индерҙек практиканы, йәғни ул уҡытыусының нагрузкаһына һәм аудиторияла уҡыу ваҡытына инмәй, әммә практикаһы тураһында студент кафедра алдында иҫәп-хисап бирергә тейеш. Буласаҡ уҡытыусылар мәктәпкә барырға, әгәр ҙә студент юрист икән, ҡайҙалыр курьер йә ярҙамсы булып, һис булмаһа, суд процестарында, юридик хеҙмәт күрһәтеү процедураларын ҡарап, тыңлап ултырып булһа ла, буласаҡ бухгалтерҙар бухгалтерия "кухняһын" өйрәнеп, практика үтергә тейеш. Беҙ был практиканы "Етәксе ярҙамсыһы" өйрәнеү-танышыу практикаһы тип атаныҡ. Практиканы 2-се семестрҙан алып 7-се семестр бөткәнсе үткәрергә иҫәп тотабыҙ.

**В. ХАЖИН:** Тағы ла ошо маҡсатта диплом эше яҙыусының индивидуаль кенәгәһе кеүек кенәгә асасаҡбыҙ. Студенттың практика көндәлеге тип аталған был документты студент эш төрҙәрен яҙып, анализлап, һығымталар яһап тултырырға тейеш була. Бөгөн беҙҙең төп йүнәлеш - өйрәтеү булырға тейеш, сөнки белемде былай ҙа бирәбеҙ. Бөтә донъя хәҙер өйрәтеү менән шөғөлләнә. Беҙҙең уйыбыҙса, беҙҙә уҡып, ҡулына диплом алып сыҡҡан студент, үҙенең һөнәре буйынса эшкә урынлашып, тота килеп, профессиональ кимәлдә эшләй башларға тейеш. Йәғни ул 2-3 йыл буйы кемдәндер нимәгәлер өйрәнеп ултырырға тейеш түгел.

Бынан тыш, беҙ өлгәшеүсе, "яҡшы" һәм "бик яҡшы" билдәләренә генә уҡыусы 5-се курс студенттарына дәрескә ирекле йөрөргә рөхсәт итәбеҙ. Уларҙың уҡыуы тулыһынса тип әйтерлек үҙ аллы эш менән бәйле. Әлбиттә, улар лекцияларға, практик дәрестәргә, семинарҙарға йөрөй, тик күп ваҡытын үҙаллы шөғөлләнә. Шул уҡ ваҡытта улар һөнәре буйынса эш таба алһалар, беҙ уларға эшләргә рөхсәт итәбеҙ. Улар диплом алған ваҡытта юғары белемле белгес булып, төрлө урындарҙа эшләп йөрөйҙәр. Күптәре был ваҡытта стажер срогын - һынау мөҙҙәтен үтеп тә өлгөргән була. Бына ошондай шарттарҙа быйыл беҙҙең юғары уҡыу йортон бөтөүселәрҙең 90 проценттан ашыуы үҙ һөнәре буйынса эшкә урынлашты. Ә инде ҡалған 10 процентын кейәүгә сығып, бала табыусылар, аспирантураға китеүселәр, икенсе һөнәр һайлаусылар тәшкил итә. Ә ил буйынса юғары уҡыу йортон тамамлаусыларҙың 60-70 проценты ғына һөнәре буйынса эшкә урынлашҡан.

**Юғары белемле кеше үҙаллы фекер йөрөтөүсе, фекерен башҡаларға еткерә белеүсе телмәр оҫтаһы ла булырға тейеш бит әле...**

**В. ХАЖИН:** Быйыл 2-се семестрҙан алып һәр семестр һайын курс эше яҙыуҙы индерҙек. Бында инде төп профилле дисциплиналарҙан студент курс эше яҙырға тейеш. Элек курс эше йылға берәү генә ине, хәҙер йылына ике тапҡыр. Курс эшен яҙыр өсөн күпме китап аҡтарырға, фекеренде тупларға кәрәк. Әгәр ҙә студент быға 1-се курстан уҡ өйрәнә башлаһа, шуға ылығып китә. Мәҡәләләр яҙыуын, сығыш яһауын, йәғни уларға үҙенең һөнәре буйынса фекерен башҡаларға еткерә белеүен талап итәбеҙ. Быны икенсе төрлө, ижади фекерләүҙе, һәләтлектәрҙе үҫтереү, тип тә атарға була. Һәр бер урында студент, стандарт булмаған фекер йөрөтөп, стандарт булмаған ситуацияларҙан сығыу юлын таба белергә тейеш.

**Һеҙҙең институтта, асылда, ауылдарҙан килеүсе ошо төбәк башҡорт йәштәре уҡый. Уларҙа дөйөм кешелек күҙлегенән ҡарағанда күркәм, әммә хәҙерге заман ысынбарлығы күҙлегенән ҡарағанда үҫеш өсөн ҡамасаулаусы һыҙаттар бар. Бындай һыҙаттарға баҙнатһыҙлыҡ, оялыу, үҙ фекеренде яҡламау, уны белдерергә тырышып бармау инә. Бына шул мәсьәләләр буйынса ниндәйерәк эш алып бараһығыҙ?**

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Ауылдан ҡалаға килеүсе йәштәргә, әгәр ҙә дөрөҫ йүнәлеш бирмәһәң, уларҙы күҙ уңынан ысҡындырһаң, шул уҡ баҙнатһыҙлыҡ тиҙ арала битһеҙлеккә, оялыу оятһыҙлыҡҡа ла әйләнеп китеүе бар. Шуға күрә беҙ бында ауылдан килеүсе студенттарҙы, үҙебеҙҙәге яңы йәшәү шарттарына күнектергәндә, улар тыуып үҫкән, мәктәптә белем алған ауыл мөхитенең күркәм күренештәрен дә үҙебеҙгә күсерәбеҙ. Шуларҙың тәүгеһе һәм иң мөһиме - һаулыҡ һорашыу, икенсеһе - матур итеп кейенеп йөрөү, эсмәү һәм тартмау, аҡырып-баҡырып һөйләшмәү һ.б.

**В. ХАЖИН:** Баҙнатһыҙлыҡ, оялыу кеүек комплекстарҙан үҙаллылыҡҡа өйрәтеү менән ҡотолоп булалыр, тип уйлайым. Шул уҡ курс эше, рефераттар яҙыу үҙаллылыҡҡа өйрәтә. Яҙыу бер нәмә, студент яҙғанын иптәштәре һәм уҡытыусыһы ҡаршыһында сығып яҡларға ла тейеш. Йәғни беҙ уларҙы 1-се курстан уҡ иптәштәре алдында үҙ-үҙен торорға өйрәтәбеҙ. Кешегә аудитория, майҙан алдында сығыш яһау бик ауыр бирелә торған ғәмәл. Беҙҙең тағы ла өҫтәмә һөнәр биреүсе факультет бар. Унда үҙешмәкәрлек менән дә шөғөлләнәләр, унан тыш, һәр бер факультет һәм кафедра ниндәйҙер өҫтәмә һөнәр биреү дәрестәре ойоштора. Һәр бер факультетта беҙҙең тәрбиә эштәре буйынса декан урынбаҫарҙары бар. Ҡыҫҡаһы, беҙ ошо факультет аша ла, кафедра-деканаттар аша ла һәр бер студентты ҡыбырлатырға тырышабыҙ, уларға һәлкәүлеккә бирелергә

мөмкинлек бирмәйбеҙ. Төрлө саралар үткәрәбеҙ, мәҫәлән, ата - әсәләр менән осрашыуҙы студенттар үҙҙәре алып бара. Әйтәйек, I курс студенттарының ата -әсәләре йыйылышын үткәреү беҙҙең институтта традицияға әүерелгән. Шулай уҡ беренсе курстар сентябрҙең тәүге аҙнаһында институт етәкселеге менән осрашыу үткәрә, уҡыу йортоноң тәртибе менән таныша. Йәғни ниндәй генә саралар үтмәһен, беҙ уларҙы ойоштороуҙы студенттарға йөкмәтәбеҙ. Былар яйлап-яйлап уларҙың баҙнатһыҙлыҡ, юҡтан оялыу, кәрәкмәгәндән тыйылыу кеүек комплекстарын юҡҡа сығара. Әгәр ҙә беҙ шулай итмәһәк, был комплекстарҙан ҡотолоу юлы уларҙы әҙәпһеҙлеккә телендә уларҙың һәләттәрен асырға тырышабыҙ, һөйләшергә өйрәтәбеҙ. Ғәжәп: араларында шағирҙар күп, хатта шиғри йыйынтыҡ сығарырлыҡ кимәлдәге авторҙар ҙа бар. Уларҙың үҙҙәренең стена гәзиттәре бар, альманах төҙөйҙәр, һәм улар өсөн айырым шиғри түңәрәк эшләп килә. Кеше бөгөн бик бөйөк шағир булмаһа, ул шиғыр яҙып ҡына тамағын туйҙыра алмай. Ғөмүмән, шиғыр элек-электән тамаҡ туйҙырыу шөғөлө булмаған. Хәйер, "Шиғыр яҙып байығыусылар ҙа бар, шағир булып кем һуң байыған?" тигән бит әле Назар Нәжми. Мәҫәлән, мин бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич, үҙенең шиғырҙары өсөн ниндәйҙер гонорар лы", тигән әйтем бар. Ғүмер юлы һайлауында һинең икенсе төрлө һәләттәрең ярҙам ғына итә. Шул уҡ ваҡытта бар кеше лә артист булып бөтә алмай. "Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?" тигән халыҡ әйтеме шуға ишара. "Ғүмеремде яратмаған эш менән үткәрҙем", тип әйтеү насар, шул уҡ ваҡытта "Артист булһам, һәйбәтерәк йәшәр инем", тигән һүҙ дөрөҫ түгел.

**В. ХАЖИН:** Мин Зиннур Ғөбәйҙулла улы менән килешәм. Әгәр ҙә кеше сәнғәтһеҙ йәшәй алмай икән, бының өсөн үҙешмәкәр сәнғәт бар. Арғаяш районы Бәжекәй урта мәктәбенең элекке директоры Рафаэль Мөхәмәтйәнов Арғаяш халыҡ театрының иң

**▸ Юғары уҡыу йортона ҡабул итеү инициативаһы хәҙер уҡыу йорттарынан мәктәптәргә күсте. Шуға мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Берҙәм дәүләт имтиханы, бәлки, насар түгелдер ул, ләкин уға ҙур хоҡуҡты биреү насар, йәғни шуның һөҙөмтәһе менән бала теләһә ниндәй юғары уҡыу йортона уҡырға инә ала, тигән закон насар. Мәктәп уҡыусыларҙың белемен теләһә нисек тикшерһен: хет берҙәм дәүләт имтиханы, хет айырым дәүләт имтиханы, хет айырым мәктәп имтиханы булһын, ләкин юғары уҡыу йорто үҙенә кәрәкле студентты үҙе һайлап алырға тейеш.

**В. ХАЖИН:** Был йәше еткән егеттең күҙен бәйләп, метр 90 сантиметрға һикергәнен алырға тейешбеҙ. Беҙ иһә, һауынсылар әҙерләгән уҡыу йорто булараҡ, уның нисек һыйырҙы эйҙерә белеүенә, малды яратыуына, елененде һөттө ҡалдырмай һауа белеүенә иғтибар итергә тейешбеҙ. Беҙгә иһә, уның күпме бейеклеккә һикерә белеүенә ҡарап алырға ҡушалар. Был, әлбиттә, тупаҫ сағыштырыу, әммә парадокс булғас, бара. Сөнки Берҙәм дәүләт имтиханында бирелгән һорауҙарҙың сифаты шулай. Уларҙа баланың белеме тикшерелмәй, төрлө осраҡлыҡтарға, нимәгәлер хәбәрҙар булыуға ҡоролған. Беҙгә хәбәрҙарлыҡ кәрәкмәй. Уға китһә, пенсионер бабай барыбыҙға ҡарағанда ла күберәккә хәбәрҙар. Сөнки уның ваҡытлы матбуғат уҡырға, радио тыңларға, телевизор ҡарарға, төрлө ғәйбәттәргә ҡолаҡ һалырға ваҡыты күп. Беҙгә ундай студент кәрәкмәй, фекерләй белгән кеше кәрәк.

**▸ Бер юғары уҡыу йорто милләттең тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә аламы?**

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Әгәр ҙә уға дәүләт тарафынан тейешле ярҙам булһа, үҙгәртә ала. Әгәр ҙә юғары уҡыу йорто студенттарының бәләкәй генә аҡсаһы менән эш итһә, уны эшләп булмай. Һәр бер һөҙөмтәнең нигеҙендә, әлбиттә, финанс ята. Бөгөн беҙ ундай ярҙамды тоймайбыҙ, һәм ул юҡ та. Бер юғары уҡыу йорто тотош милләттең тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртеүе шикле, ләкин ыңғай йоғонто яһай ала.

**В. ХАЖИН:** Беҙҙең үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙа ғына ла бындай ыңғай миҫалдар бар. Мәҫәлән, 20 -се быуат башы башҡорт зыялыларының күбеһе Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә уҡыған, ә инде Башҡортостан дәүләтселегенең нигеҙен төҙөүҙә ҡатнашҡан күренекле шәхестәребеҙҙең байтағы Зәйнулла ишандың Троицкиҙағы "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә белем алған. Быйыл беҙ 20-се уҡыу йылын башланыҡ, ошо йылдар эсендә барлығы 10 меңдән ашыу кеше Сибай институтын тамамланы, һәм уларҙың милләтебеҙ тормошона йоғонтоһо, һис шикһеҙ, киләсәктә күренәсәк.

# УҠЫУ ЙОРТО...

## ыңғай яҡҡа үҙгәртә аламы?

алып килеүе бик мөмкин. Ошондай шарттар студенттарҙы комплекстарҙан да ҡотолдора һәм үҙ-үҙен эш менән иҫбатларға, ҡыйыулыҡҡа өйрәтә, таныш һәм таныш булмаған аудитория алдында үҙен иркен тоторға күнектерә.

**▸ Беҙ, урта мәктәпте тамамлап һөнәр, шул йүнәлештәге уҡыу йортон һайлағанда, барыбер ҙә объектив була алмайбыҙ. Бының, әлбиттә, бик күп сәбәптәре бар. Күп осраҡта "эх, яңылыштым, әгәр ҙә икенсе йүнәлештә киткән булһам, күпкә өлгәшә алыр инем", тип үкенестәр ҙә белдерәбеҙ. Һеҙҙең уҡыу йорто студенттарҙың "йәшерен" һәләттәрен асыу буйынса ниндәйҙер махсус эштәр алып барамы? Әйтәйек, тәбиғәттән гуманитар фәндәргә һәләте булған студент теүәл фәндәр буйынса белем үҙләштерә, йәки - киреһенсә...**

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Был эш буйынса беҙ махсус рәүештә шөғөлләнмәйбеҙ. Шулай ҙа юғары уҡыу йорто системаһындағы өҫтәмә һөнәр факультеты, минеңсә, тап ошо маҡсатҡа ҡоролғандыр, тип уйлайым. Беҙҙең халыҡта ниндәйҙер сәнғәт төрөнә маһирлығы булмаған кешене, ғөмүмән, табыуы ҡыйын. Шуға күрә кешелә ниндәйҙер йәшерен һәләт бар икән, ул, асылда, сәнғәткә барып тоташа. Өҫтәмә һөнәрҙәр биреү факультетында бейеү, театр коллективы, музыкаль төркөмдәр бик уңышлы эшләп килә.

**В. ХАЖИН:** Беҙ бөтә студенттарға ла дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытабыҙ. Әммә беҙ уларға башҡорт теленең грамматикаһын уҡытмайбыҙ. Бары тик башҡорт алып, шуның иҫәбенә йәшәп йә ял итеп ятҡандыр, тип күҙ алдына ла килтерә алмайым.

Ә инде юғары уҡыу йорто шарттарында кешенең шиғыр яҙырға һәләтен үҫтереү барыбер ҙә уның үҙаллы ижади фекерләү һәләтен үҫтереүгә килтерә. Шиғыр яҙған кеше барыбер стандарт рәүештә фекер йөрөтмәй, һәм ул, шағир булып китмәһә лә, үҙенең төп һөнәрен үҫтереүҙә башҡаларҙан ныҡ айырылып тора. Бөгөн беҙҙең юғары уҡыу йорто системаһының иң ҙур дошманы - ҡалып, шаблон. Беҙ ана шуларҙан ҡотолорға тейешбеҙ. Бына беҙҙең башҡорт мәктәптәре, мәҫәлән, шаблон эшләп сығара. Ниндәй генә район булмаһын, ул Көйөргәҙеме, Мәсетлеме, Белоретмы, Учалы, Хәйбулламы, Бөрйәнме, мәктәп уҡыусылары барыһы ла бер төрлө һөйләшә лә ҡуя. Йә булмаһа, бер төрлө һөйләшә белмәй.

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Беҙ студенттарыбыҙға төрлө ситуацияларҙа үҙ-үҙен тота белергә өйрәтәбеҙ. Һәләтле кеше һәр осраҡта ла юғалып ҡалмай. Әгәр ҙә студент музыкаға һәләте булып, хоҡуҡ факультетын һайланы икән, унан ғәҙеллеккә тоғро юрист сығасаҡ. Урыҫтарҙа,"Талантлы кеше һәр өлкәлә лә талант күренекле артистарының береһе. Элек ул алдынғы ҡарашлы башҡорт теле уҡытыусыһы булһа, бөгөн - талантлы артист.

**▸ Һеҙ элекке студенттарығыҙ менән осрашаһығыҙмы? Уларҙың яҙмышын ыңғай яҡҡа үҙгәртеүегеҙҙә үҙегеҙҙең ҡатнашлыҡты тояһығыҙмы?**

**З. ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:** Беҙ быны уларҙың карьера буйынса үҫеүендә күрәбеҙ. Мәҫәлән, беҙҙекеләр уҡып бөткәс, Өфөгә бара икән, унда уларҙың тартып тороусы кешеләре булмауға ҡарамаҫтан, баш



ҡаланы тиҙ яулайҙар, бик тиҙ үҫәләр. Сөнки беҙ уларҙы үҙаллылыҡҡа һәм эш эшләргә өйрәтәбеҙ. Йыл һайын беҙҙә тамамлаусы 40-50 йәш кеше Өфөгә эшкә урынлаша. Беҙҙә уҡыған студенттар һәр урында ла бер-береһен танайҙар, беләләр, бер-береһенә ярҙам итергә тырышалар.

**В. ХАЖИН:** Был төбәктә лә барлыҡ етәксе урындарҙа тиерлек беҙҙең элекке студенттар эшләй. Ошо төбәктең юғары уҡыу йортонда уҡыған һәр 3 студенттың 2-һе беҙҙә белем алыуын иҫәпкә алғанда, уларҙың төбәк тормошонда тотҡан урынының ни кимәлдә икәнен билдәләп булалыр.

ҡулына әләккән ҡыҙға өйләндереү һымаҡ килеп сыға. Берҙәм дәүләт имтиханы булһын ул, был беҙҙең эш түгел, мәктәптең эше, ләкин беҙҙең хоҡуҡтар иҫәбенә түгел. Беҙ кемде уҡырға алырға теләйбеҙ, шуларҙы алырға тейешбеҙ. Бында законға бер генә төҙәтмә индереү зарур: "Уҡыусы берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре буйынса ла уҡырға инә ала", - тигән шарт ҡына кәрәк. Ошо шарттың "ла" тигән өлөшө лә беҙгә үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы һаҡларға ярҙам итер ине. Мәктәптәрҙә Берҙәм дәүләт имтихандарын әшнәлекһеҙ, коррупцияһыҙ үткәреү юлын табырҙар ул, ләкин беҙ уның буйынса ғына студенттар ҡабул итергә тейеш түгелбеҙ. Был - парадокс. Мәҫәлән, бер кеше бейеклеккә 1 метр 70 сантиметрға, икенсеһе 1 метр 90 сантиметрға һикерә, ә беҙҙең институт һауынсыларҙы әҙерләй икән, ти. Һәм беҙ, һауынсы әҙерләү өсөн, ошо икәүҙең 1

*▸ Мәктәптәрҙә Берҙәм дәүләт имтихандарын әшнәлекһеҙ, коррупцияһыҙ үткәреү юлын табырҙар ул, ләкин беҙ уның буйынса ғына студенттар ҡабул итергә тейеш түгелбеҙ. Был - парадокс. Мәҫәлән, бер кеше бейеклеккә 1 метр 70 сантиметрға, икенсеһе 1 метр 90 сантиметрға һикерә, ә беҙҙең институт һауынсыларҙы әҙерләй икән, ти. Һәм беҙ, һауынсы әҙерләү өсөн, ошо икәүҙең 1 метр 90 сантиметрға һикергәнен алырға тейешбеҙ. Беҙ иһә, һауынсылар әҙерләгән уҡыу йорто булараҡ, уның нисек һыйырҙы эйҙерә белеүенә, малды яратыуына, елененде һөттө ҡалдырмай һауа белеүенә иғтибар итергә тейешбеҙ. Беҙгә иһә, уның күпме бейеклеккә һикерә белеүенә ҡарап алырға ҡушалар.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бер юғары уҡыу йорто милләттең тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә аламы?" тигән һорауға: әгәр ҙә ул юғары уҡыу йорто уҡытыусыларында Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты уҡытыусыларындағы кеүек фиҙаҡәрлек булһа, был мөмкин, тип яуап бирергә булыр ине. Сибай институты Башҡорт дәүләт университетының филиалы һанала һәм былтыр ул Рәсәй Федерацияһы юғары уҡыу йорттары филиалдары араһында бар күрһәткестәр буйынса иң яҡшыһы тип табылды.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ТҮҢӘРӘК КЕНӘ ЙӘШТӘ...



## ЮБИЛЯРҒА ШУНДАЙ ҺОРАУ:

**Йәшлек, Ҡартлыҡ... Риф ағай, айырмаһы бармы уларҙың, юҡмы? Шуны һиҙәһегеҙме? Әллә ижад кешеһенә уның тәьҫире бер ҙә ҡағылмаймы? Бигерәк тә шағир халҡына...**

- Кемгә нисектер, мин үҙем уның бер ҙә айырмаһын тоймайым. Ауырлығы йөҙ килонан артҡан ҡатын-ҡыҙҙы йәш саҡта ла, күтәреп, ҡулдарымда йөрөтә алмай торғайным, әле лә булдыра алмайым. Шулай булғас, ниндәй айырма булһын инде. Уларға ғишыҡ тотоп, ут йотоп, йәш саҡта ла әҫәрҙәр яҙа торғайным, әле лә был "кәсепте" ташлай алмайым. Үҙемде аҡлап хатта шундай шиғыр ҙа яҙғаным бар:

Һылыу ҡыҙҙарға ҡарайым...
Йәшемде самалайым.
Аҡыл менән күңелемде
Һөйөүҙән аралайым.
Тик тойғоларҙы тыйырлыҡ
Саралар табалмайым...
Эй, һөйһәләр, һөйәм дә ҡуям,
Бер нигә ҡарамайым!

Уйынлы-ысынлы әйтелгән был һүҙҙәрҙә, минеңсә, хәҡиҡәт бар: айырыуса ижад кешеләрен, бигерәк тә шағир халҡын күҙ уңында тотҡанда. Тән менән бергә йән дә ҡартая. "Ҡартаямы ни ул йөрәк" тип йырҙар йырланһа ла, әлбиттә, күңел дә олоғайыу осорон кисерә башлай. Ләкин тәҡдир яҙмышы һөнәреңде һайлатҡан, уны тәнеңә-йәнеңә һалған, эсеңдәге ошо ут һәр саҡ янып тора, тынғылыҡ бирмәй икән, ул һиңә ҡартайырға ла, ижад эшенән янтайырға ла ирек ҡуймай. Йәш үткән һайын, мин быны үҙемдә нығыраҡ тоям. Ошо стимул - дәрт һине алға, ижадҡа әйҙәй. Ҡартлығыңды ла оноттора...

**Ижад стимулы... Эйе, Хоҙай, тәбиғәт биргән, тәҡдиреңә әүерелгән ижад "уты" була. Ул һине тынғыһыҙлай, ижадҡа әйҙәй, әйткәнегеҙсә, хатта ҡартайырға ла ирек ҡуймай. Ә бит уның бигерәк тә ҡәҙерлеһе - хөкүмәт стимулы ла бар. Уның хаҡында нимә тиерһегеҙ?**

- Мин һеҙҙең гәзиткә тәҡдим иткән шиғырҙар шәлкеме араһындағы "Хоҙайҙан ҡурҡыу" тигән әҫәрҙә һеҙҙең һорауға бер ни тиклем яуап бар. Эйе, Хоҙай тәҡдиренән тыш, власть стимулы бар. Ҡайһы саҡта ул Тәңренекенән дә юғары, тәҡдире уныҡынан да ҡатыраҡ. Йылдар буйы эшләгән, 4-5 йылға бер сыҡҡан йыйынтығыңа әҙме-күпме дәрәжәлә матди ярҙам алыу, тормошоң кимәлен күтәреү йәһәтенән күҙгә күренер стимул булмаһа ла, күңелеңде дәртләндереү яғынан иҫ киткес илһам һәм этәргес көс ул. Сөнки төп эшеңдән әҙ генә бушаған арала көн-төн ултырып ижад иткән әҫәрҙәреңдең дәүләт тарафынан баһаланыуы ҡиммәт. Был йәһәттән дә алды-ялды белмәй, халыҡ тормошон күтәреү өсөн бөтәһен дә эшләгән хөрмәтле Мортаза ағай Рәхимов етәкселек иткән Башҡортостаныбыҙ үрнәк булып тора. Яҙыусыларҙың китаптары, гәзит-журналдар сыға, яңы театрҙар төҙөлдө, улар бөтәһе лә эшләп ята, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең ижады ла баһаланып тора. Был иң ҙур стимул. Әлбиттә, беҙҙең күптәребеҙ, бер юлға бер тин түләнмәһә лә, барыбер ижад эшенән туҡталмаҫ ине. Элек шундай бер таҡмаҡ була торғайны:

Шишмә ҡаҙыусы булмаһа,
Бар ул ҡойо ҡаҙыусы.
Минең йәрем иҫәрерәк,
Булыр, ахыры, яҙыусы.

Беҙ бына шул "ауырыу" менән сирләгән ғүмерлек "иҫәрҙәр". Әйҙә, шулай булып ҡалайыҡ,

**Алда беҙ, Риф ағай, гел ижадҡа бәйләнешле һүҙ алып барҙыҡ. Тормош бит ижадтан ғына тормай. Донъя көтөү мәшәҡәттәре күп. Тағы ла нимә менән мәшғүлһегеҙ?**

- Ижадҡа бик әҙ ваҡыт бүлә алдым. Был иң ҙур үкенесем. "Үкенес" тигән һүҙ ҙә дөрөҫ булмаҫ. Шулай тура килде. Тормошто рәтләргә, улым менән ҡыҙымды үҫтерергә, уҡытырға, уларҙы үҙаллы юлға баҫтырырға кәрәк ине. Балалар ҡул араһына кергәнсе, тынғыһыҙ, ғаилә өсөн бөтәһен дә эшләргә әҙер, иҫ киткес егәрле ҡатыным Хөрмә менән йорттағы ремонт эштәрен үҙебеҙ башҡарҙыҡ. Бынан утыҙ йыл элек алған баҡсала бары үҙ ҡулдарыбыҙ менән верандалы йорт, мунса күтәрҙек. Икенсегә мунса күтәреүгә һәм башҡа эштәргә балалар ҙурайҙы. Улар ҙа унған, мөмкинлектәр табып, ярҙам итергә торалар. Баҡсалағы йөҙәрләгән ағас-ҡыуаҡтарҙан, йәшелсә-емештәрҙән ҡышҡылыҡҡа өс ғаиләгә лә етерлек йәшелсәләр эшкәртәбеҙ, вареньелар әҙерләйбеҙ. Бына шулай, баҡса "ауырыуы" ла ҡағылды беҙгә. Ошолар һәм ижад хаҡында уйлап, бер саҡ шундай шиғыр ҙа яҙып ҡуйғайным:

Үҙем киткәс, ҡулым, уйым ҡала
Ағас-ташта һәм ҡағыҙҙа.
Йортом туҙғас, иҫләһәләр икән,
Ул бит булды, тиеп, шағир ҙа.

Тағы ла бер" ауырыуым"ды әйтмәй булдыра алмайым: ул - спорт. Мин хоккей, футбол, волейбол, бокс ҡараусы көйәрмән. Улар минең өсөн нимә менән тамамланырын белмәгән иң шәп спектакль- тамаша. Мин көйәрмән булмағандарҙы йәлләп тә ҡуям. Шул ләззәтһеҙ нисек йәшәргә мөмкин?!

Бөтәһе лә бергә барырға тейеш тормошта. Шул саҡта йәшәү ҙә күңеллерәк, ижад итергә лә дәрт тыуып тора.

# ЯЛЛАНДЫМ БАРЫ ХАЛҠЫМА

## Йән хеҙмәтсеһе булып

### Сентябрь

Тәбиғәттең ғәжәп мәле бар ул -
Мөғжизәле, серле бер айы:
Һәр көн һайын алмашынып тора
Тирә-йүндә төҫтәр буяуы.

Урманда ла, урамда ла хәҙер
Алтынланды ағас, ҡыуағы.
Әле генә ямғыр һибәләһә,
Әле балҡый "әбей сыуағы".

Ер генәме, хатта күк-йыһандың
Холоҡ-ҡылығы башҡа төҫләрәк:
Бөләңгерт ут һипкән ай-йондоҙҙар
Төнөн яна балҡыу - көслөрәк.

Кешеләр ҙә бүтәнсәрәк был ай:
Кейемдәре, йөҙө, күңеле.
Алда торған ниғмәт-байлыҡтарҙы
Тыуҙырыусы сөнки ул - үҙе!

"Был һуң ниндәй ғәжәп ваҡыт?" - тиеп,
Кемдәрҙеңдер мөмкин һорауы.
Был - сентябрь, минең тыуған айым,
Мөғжизәгә сумған көҙ айы!

### Ҡәҙерлеһең, Ваҡыт

Һыйпайым аҡ сәстәремде,
Һөртөп ҡуям йәшемде...
Әйтсе, Ваҡыт, күпме йылдар
Ҡайҙа ҡапыл йәшенде?

Телгә килде ҡырыҫ Ваҡыт:
- Һеҙ бит,- тине,- һәр ваҡыт
Уйланырға, үкенергә
Оҫтаһығыҙ... юғалтып.

Оҙаҡ ектең һин атыңды,
Эҙләп ижад затыңды.
Кеше баҡырҙарын йыуып,
Юғалттың алтыныңды.

Ҡапылдан килгән "бәләң" бар:
Намыҫ һәм баҫалҡылыҡ.
Иҫән саҡта уларҙы һис
Баһалап бармай халыҡ.

- Туҡта, Ваҡыт, һин төпкәрәк
Төшәһеңдер, моғайын.
Йәшәгәнсә, мин алда ла
Асылымда булайым.

Тик һүҙең хаҡ: көн-төн һине -
Хазинамды юғалттым.
Ҡөҙрәтеңде уйлай торғас,
Бар үҙемә бер антым:

Йәш менән гонаһ йыуылмай,
Күр, Шағир, ҡояш сыға!
Ваҡыттың хәҙер минутын
Хаҡың юҡ юғалтырға!

* * *

Тыуған ерем, туған телем, моңом,
Атай-әсәй, халҡым - вариҫым:
Әгәр миңә һеҙ ят күренһәгеҙ,
Ҡәһәрләһен мине намыҫым.

Ил алдында хыянатлыҡ ҡылып,
Һатам икән изге ир данын:
Аяҙ көндә йәшен булып күкрәп,
Хөкөм итһен мине выжданым.

### Мәккә

Һирәк ҡайтам икән, ҡуй, әйтмәгеҙ,
Төйәгенән, тиеп, төңөлгән.
Тыуған ергә юлдар өҙөлмәгән,
Күңелемдә ҡылдар өҙөлгән.

Дүрт тиҫтәнән ашыу йылдар элек
Әсәй киткәс, иңрәп йән ҡылы
Сыңланы ла...
Ҡайтыр юл-һуҡмаҡты
Аҡты зарлы һағыш тулҡыны.

Атайымдың, апай-ағайҙарҙың
Күҙен йомғас әжәл көн элек -
Һынды ҡанат... Хәйер, мин генәме?
Ауыл - етем, ят бер ер кеүек.

Төйәгендә, йорт-ҡураға ҡарап,
Хужаларын күрмәү - аяныс.
Тыуған ерҙең йәме, ҡото бөттө
Һәм ҡалманы кеүек таяныс...

Гүрҙә ятмай, күпме туған, яҡын
Йөрәгемдә - йәндә тереләр.
Туғандарҙы төштәремдә күрәм,
Ҡаршы сығыр кеүек тиҫтерҙәр...

Һирәк ҡайтам икән, ҡуй, әйтмәгеҙ.
Тупрағынан, тиеп, төңөлгән.
Ауылымда йөрәк бәхетенән
Йән йырлатыр ҡылдар өҙөлгән...

Туҡта, күңел!.. Бишегеңде аҫҡан
Төйәктәнме йәнең төңөлгән?
Һинең генәме ни яҡындарың
Мәңгелеккә ергә күмелгән?

Кисерегеҙ мине, ауылдаштар,
Кисерегеҙ мине, яҡташтар:
Тик әрнеүҙән әйттем: ғәзиз миңә һәр кем,
Һәр бер урам, йылға, гөл, таштар...

Бөтәһе лә улар - бәғеремдә,
Барыһы ла - бауыр-йәнемдә.
Ваҡыт еткәс, шулар уртаһында
Ятһа икән минең тәнем дә.

Һирәк ҡайтам икән - кисерегеҙ...
Төйәгемдән мәңге төңөлмәм!
Яҙмыш миңә тән-йән биргән ерҙе,
Тәңре Мәккәһенә тиң күрәм!

### Намыҫ ҡаршыһында

Борсолоуҙар ҡосағына ташлап,
Ҡойон ҡупты бер саҡ уйымда:
Ҡай берәүҙәр исем, дан, дәрәжә
Юллай белгәс, нисек күтәрелеп,
Ҡойоналар наҙлы нурында.
Улар кеүек таҫма телләнә бел,
Билеңде бөк кәрәк урында.

Уйҙы уйып, намыҫ ҡуҙғалды ла
Ырғып торҙо: "Баҫ,- тип, - ҡаршыма!
Нисек итеп килде был түбән уй
Юғары һәм ғорур башыңа?!
Меҫкенләнеү - хурлыҡ ир-егеткә,
Һәм бишләтә - ижад халҡына!

Арҡаһында ҡамсы уйнағанда,
Баш өҫтөндә ҡылыс торғанда,
Ата-бабаң таҫма телләнмәгән,
Мал, алтын, тип, иман-выжданына
Ҡундырмаған бөртөк туҙан да.
Ә һин әҙер дан-дәрәжә өсөн
Йән һатырға яйы сыҡҡанда..."

Бөгөлөп төштөм хәтәр был хөкөмдән,
Утлы ҡулса ҡыҫҡас алҡымда.
Әммә баҫтым ғәфү үтенергә
Йәнде ҡулға услап алдым да.
"Исемемә, - тинем, - иң ҙур баһа:
Һин - намыҫым, донъя алдында!"

### Хоҙайҙан ҡурҡыу

Хоҙай менән һөйләшергә
Хыял бар - дарман етмәй:

***✓ Орфография, орфоэпия ҡағиҙәләре бар, шуларҙы теүәл үтәй барһаң, проблемалар булырға тейеш түгел бит, тиерһегеҙ. Шулайын шулай ҙа ул, әммә ошо ҡағиҙәләрҙең дә "әтнәкәһе" бар икән.***



Гонаһлы Ерҙән осорға
Эштәрем һис бер бөтмәй.

Хәйер, нимә әйтермен һуң?
Тәңре белә бөтәһен.
Ярлыҡау ҙа һорамайым,
Беләм ғәфү итәһен.

Алдашманым, урлашманым,
Хәләл көсөм - тапҡаным.
Түргә менергә самалап,
Түрәгә йән һатманым.

Ялландым бары халҡыма
Йән хеҙмәтсеһе булып.
Һайраным йөрәк йырымды
Күңел талына ҡунып.

Был шөғөлдө, Хоҙайҙан тыш,
Хөкүмәт белеп тора.
Баш һалмағас, бүләктәрен
Башҡаға бүлеп тора.

Хәйер, улар - ваҡ өсөнлөк,
Ҡуҡрайырға үҙ-ара.
Хаҡ хөкөмдә саф йәндәргә
Тәңре һунлап сығара.

Тик бер үпкә: берҙән-берһең
Ғәзеллектең һағында.
Лайыҡлыны күрһәң икән
Ер өҫтөндә сағында...

Хоҙай менән һөйләшергә
Хыял бар - йөрәк етмәй:
Илгә нисек күренермен
Ҡайтарһа, ҡабул итмәй?..

## Беҙ - ауыл балалары

Ауыл, тибеҙ ҙә үләбеҙ
Ауылдан китәбеҙ ҙә.
Уны һағыныр өсөнмө
Йәшәйбеҙ бүтән ерҙә?

Әйҙәһә лә, әүрәтһә лә
Асфальтлы ҡалалары,
Күңел менән ғүмерлеккә
Беҙ - ауыл балалары!

## Юҡ башҡа сараларым

Төҫлө күҙлектәр кейеп мин
Донъяға ҡараманым.
Төҫөндә күреп өйрәндем
Аҡтарын, ҡараларын.

Аҡтарын күрҙем - аҡ, тинем,
Ҡараһы икән - ҡара.
Был - хәҡиҡәт, тик һин уны
Һәр саҡ иҫбатлап ҡара...

Ғәзеллек, ике йөҙлөлөк,
Дөрөҫлөк, нахаҡ, ялған:
Бөтәһе бергә ялғанған -
Донъяны солғап алған.

Аҡтарға яғылған ҡара,
Ҡараға тамған аҡтар...
Бындай саҡта, буялыуҙан,
Намыҫ күҙҙәре һаҡлар.

Шул күҙҙәр менән байҡайым
Ер һәм күк араларын.
Башҡаса ғүмер итергә
Юҡ минең сараларым.

Выжданса йәшәү ҡануны
Йәнемә - ҡанға һеңгән.
Күкрәк һөтөнөң сафлығы,
Паклығы булып ингән.

Намыҫым, бөтә ғәләм
Алға һынауҙар һала.
Хәҡиҡәт хаҡы ҡиммәт шул -
Күңелдә яра ҡала.

Хаҡты нахаҡтан айырып,
Күҙ, аҡыл, йөрәк тала.
(Аңлатмаҡ булам барыһын
Йырҙарға һала-һала...)

Сүп төшһә лә, тап төшмәһен
Намыҫым күҙҙәренә.
Тик шунда тура бағырмын
Кешеләр йөҙҙәренә.

Төҫлө күҙлектәр кейеп мин
Донъяға ҡараманым.
Алда ла ялған-ямандан
Выжданым аралаһын.

## Берәүгә һәм күптәргә

*Ҡатындың ниһен маҡтайһың -*
*Ҡағып түшәк һалмаған.*
*Баланың ниһен маҡтайһың -*
*Атай телен алмаған.*
*Мифтахетдин Аҡмулла.*

"Милләтем!" - тип ауыҙ һыуың ҡорой...
Ул һүҙ һинә - арҡа терәүгә.
Башта, туған, туған милләтеңдән
Юл табышып ҡара берәүгә.

Халҡын бары дөйөм яратыусы
Яратмай ул бер саҡ кешене.
Мәнфәғәте өсөн "милләтсе"нең
Был бит бары ҡупшы бер өнө.

"Тел" тип улар телен талдыралар,
Хеҙмәт яҙа, тота телмәрҙәр.
Тик шуныһы: туған телдәрендә
Балалары бер һүҙ белмәйҙәр.

Нинә кәрәк бындай милли һөйөү
Нимәгә был милли уяулыҡ?
Була икән милли мөхәббәтең
Бары ауыҙ, ҡағыҙ буярлыҡ.

Был донъяға ҡара, тәбиғәткә -
Ҡош-ҡорттарға, ағас, үләнгә:
Улар өнһөҙ, ләкин килгәндәр бит
Нәҫел өсөн бер мәл үләргә.

Нәҫел өсөн, тимәк, үҙ милләтен
Йәшәтергә - йәм һәм төҫөндә.
Ошонан да бөйөгөрәк маҡсат
Булмайҙыр ул ерҙең өҫтөндә!

"Милләтем!.." - тип ауыҙ һыуың ҡорой,
Ул һүҙ бары - арҡа терәүгә...
Быларҙы мин бик күптәргә әйтәм,
Арнаһам да бары берәүгә.

## Ғәҙәт буйынса

Ғәҙеллек булырға тейеш! -
Минең уйымса.
Тик донъя бара икән шул
Ғәҙәт буйынса.

Ғәҙәт буйынса берәүҙәр
Маҡтала, урләй.
Кемделер, ғәҙәт буйынса,
Берәү ҙә күрмәй.

Бары ла күнгән, өйрәнгән
Ошо йолаға:
Күктә ҡояш һүнер кеүек
Шулай булмаһа.

Дан балы ялап өйрәнгән
"Маяҡ" ағайҙар
Дарға менергә әҙерҙәр
Маҡталмаһалар.

Ә инде йола буйынса
Ситкә тибелгән -
Ят кеше хатта алтындай
Хеҙмәте менән!

...Ынтылма, күңел, үрелмә
Яһалма данға:
Уны алам тип, бөгөлөп,
Ялағайланма.

Бул һәм ҡал бөтә ваҡытта
Изге уйынса.
Бары йәшәмә донъяла
Ғәҙәт буйынса.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ҠАҒИҘӘЛӘР - ҒАЛИМДАРҘЫҠЫ,

## ә телдең - үҙ үҙенсәлеге

**Телебеҙҙә башҡа телдәрҙән килеп инеп, бик йыш ҡулланылып йөрөгән һүҙҙәр байтаҡ. Фарсы һәм ғәрәп телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең күбеһе башҡа башҡорт һүҙҙәренән әллә ни айырылып та тормай кеүек, сөнки улар быуаттар дауамында "башҡортлашып" бөткән. Сынйыр, маҙа, нәҙек, таҙа, тән кеүек - фарсы, алҡа, ҡамыр, мал, әҙер, әкәмәт кеүек ғәрәп һүҙҙәрен беҙ үҙ телебеҙгә хас һүҙҙәр сифатында ҡабул итәбеҙ. Һүҙҙәребеҙ берлеге генә түгел, өн-ауаздар яҡынлығы ла ниндәйҙер бер архаик замандарҙа беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙҙың ҡәрҙәш ҡәүемдәрҙән булыуын хәтерләтеп торғандай тойола.**

Халҡыбыҙ дүрт быуаттан ашыу ваҡыт арауығында урыҫ халҡы менән аралашып, бер уртаҡ Ватанда ғүмер һөргәс, телебеҙҙә урыҫ теленән ингән һүҙҙәр күп. Уларҙың элеккерәк осорҙарҙа үҙләштерелгәндәре шулай уҡ телебеҙ ҡанундарына яраҡлаштырылып, бер ни тиклем үҙгәрә биргән. Кәбеҫтә, бураҙна, бүрәнә, самауыр, миҙал, мейес, матса кеүек һүҙҙәрҙең урыҫ теленән ингәнлеге тәү ҡарашҡа күҙгә лә бәрелеп тормай.

Эйе, башҡа телдәрҙән алынып, йыш ҡулланыла башлаған һүҙҙәр телебеҙҙе байытып, аралашыу, фекер алышыу мөмкинлектәрен киңәйтә барған. Был бик һәйбәт күренеш, әммә сит телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙе әҙәби (яҙма) телебеҙҙә дөрөҫ ҡулланыу менән бәйле проблемалар ҙа юҡ түгел. Ғалимдарыбыҙ тарафынан тәҡдим ителеп, барыһы өсөн дә мотлаҡ булған орфография, орфоэпия ҡағиҙәләре бар, шуларҙы теүәл үтәй барһаң, проблемалар булырға тейеш түгел бит, тиерһегеҙ. Шулайын шулай ҙа ул, әммә ошо ҡағиҙәләрҙең дә "әтнәкәһе" бар икән.

Изге Ҡөрьән һүҙен белмәгән йәиһә ҡулланмаған кеше һирәктер. Әммә хәҙерге башҡорт матбуғатында ошо һүҙҙең яҙылышында берәүҙәр "р" хәрефенән һуң "ъ" билдәһен, икенселәр "ъ" билдәһен ҡуя ине. Мәҫәлән 1993 йылда нәшер ителгән "Башҡорт теленең һүҙлеге"ндә лә аҡҡа ҡара менән "Ҡөръән" тип яҙылған. "Ниңә шулай яҙалар, был төптө дөрөҫ түгел бит", тигәнемә бер танышым: "Дин әһелдәре шулай яҙыуҙы хуп күрә, сөнки ғәрәп телендә беренсе ижек ҡалын әйтелгәс, "ъ" билдәһен ҡуйыу кәрәк", - тип яуапланы. Татар телендә лә "Коръән" тип яҙыу ҡабул ителгән, тик татарҙар был һүҙҙәге тәүге ижекте ҡалын итеп әйтә. "Ҡөрьән" һүҙенең тәүге ижегендә нәҙек "ө" һуҙынҡыһы булғас, бында мотлаҡ "ь" билдәһе ҡуйылырға тейеш тә инде.

Шулай уҡ ғәрәп теленән үҙләштерелеп, әҙәби телдә лә, йәнле һөйләш телендә лә бик йыш ҡулланылған бер үк һүҙҙең ике төрлө - "әхләҡ" йә "әхлаҡ" рәүешендә яҙылып йөрөтөлөүе иғтибарлы кешене аптыратмай ҡалмайҙыр. Әлбиттә, ғәрәп телендә ошо һүҙҙең икенсе ижеге ҡалын әйтелеп, "әхлаҡ" рәүешендә яңғырай. Тик был осраҡта ла башҡорт теленең үҙенсәлекле ҡанунына ярашлы (был ҡанун ғалимдар телендә сингармонизм күренеше тип атала), ошо һүҙҙең икенсе ижеге күптән инде йомшартылып, "әхләҡ" формаһын алған. Ә хәҙер беҙҙә "әхлағына", тип яҙалар ҙа, барыбер "әхләғенә", тип уҡыйҙар. Был ике төрлөлөк кемгә кәрәк һуң, һәм унан телебеҙгә ни файҙа?

XX быуат аҙағында башҡорт теленең яңыртылған орфографияһы ҡағиҙәләрен ҡабул иткәндә телсе ғалимдарыбыҙ электән күнегелгән яҙылыш-әйтелеш берлеген бар осраҡтарҙа ла иҫәпкә алмаған, күрәһең. Әйткәндәй, уҙған быуаттың беҙ мәктәптә уҡыған 60-сы йылдарында "ғалимдәр", "артистәр" тип яҙыу дөрөҫ һанала ине. Беҙ ошондай һүҙҙәрҙе һөйләштә барыбер йомшартып, "ғәлимдәр", "әртистәр" тип әйтәбеҙ бит. Әгәр "артистар" һүҙен нисек яҙыла, шулай уҡыһаҡ, был телебеҙҙе күрәләтә боҙоу булыр ине. Бөгөнгө мәктәп уҡыусылары тап ошолай уҡый ҙа инде. Ғәрәпсә шул уҡ " ’алим" һүҙенән алынған "мөғәллим" һүҙендә, "Ғәлим" тигән кеше исемендә нәҙек "ә" өн-хәрефен ҡулланыу башҡорт теле ҡанундарына ярашлы башҡарыла. Элегерәк "ғаләм" һүҙен "ғәләм" тип яҙыу ҙа хатаға һаналмай ине.

Бәлки, бынығына ғына түҙергә мөмкин дә булыр ине, әммә урыҫ теленән ингән һүҙҙәрҙең йомшаҡ тартынҡыға бөтөп тә, уларға бер осраҡта нәҙек, ә икенсеһендә ҡалын ялғау ҡушып яҙыуҙы талап иткән орфографик ҡағиҙәнең нимәгә нигеҙләнеүен һис аңлап булмай. "Гениаллек", "сентябрҙә" һүҙҙәренең башҡортса әйтелеше нәҙек ялғау ҡушыуҙан телебеҙ үҙенсәлеген һаҡлап ҡалһа, йәғни урыҫ теленән алынған ошондай һүҙҙәрҙең үҙ телебеҙгә яраҡлаштырылыуы күҙгә бәрелеп, ҡолағыбыҙға яғымлы булып һарылып торһа, "секретарҙарына", "частарында", "лагерҙарыбыҙ" һүҙҙәрен нисек яҙылған, шулай уҡыһаң, аяуһыҙ тупаҫ яңғырай. Был осраҡта "секретарь" һүҙенең боҙолоп, "секретар"ға әйләнеүен, -шь менән тамамланған һүҙҙәрҙе ("ш" өнө һәр саҡ ҡаты!) күрәләтә йомшаҡ тартынҡыға бөткән һүҙҙәр рәтенә индереүҙе орфография ҡағиҙәләрен төҙөгән ғалим-ғөләмә ни эшләп күрмәне лә, һиҙмәне лә икән?

Йәнә, урыҫ телендәге "ч", "щ" өндәре йомшаҡ әйтелә, мәҫәлән, "училище" һүҙенең һуңғы ижеген нисек тырышһаң да, ҡалын итеп әйтеп булмаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең орфография ҡағиҙәләренә ярашлы, ошо һүҙгә мотлаҡ ҡалын ялғау ҡушылырға тейеш: "Мин Мәсәғүт педагогия училищеһында уҡыным", тип яҙыу дөрөҫ һанала. Тик шуныһы: был һүҙҙең башҡортсалаштырылған варианты "училишыһында" (!) рәүешендә яңғыраясаҡ, йәиһә һүҙ уртаһында ҡалған нәҙек "ще" ижегенә ҡалын ялғау ҡушып әйтеү өсөн телебеҙҙе "һындырырға" тура киләсәк.

Дөйөм ҡағиҙәләр булып та, улар ҡулланылмай торған айырым осраҡтар булыуы мөмкин. Минеңсә, башҡорт теленең яңыртылған орфографияһы ҡағиҙәләрен ҡабул иткәндә ошондай осраҡтар бөтөнләйгә иҫәпкә алынмаған. Әлбиттә, телебеҙ үҙгәрмәй тормай, уның үҫеш процестарын да инҡар итеп булмай, әммә, боронғолар әйткәнсә, ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыу ҙа хилаф эш икәнен онотмау фарыз.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*✓ Әсәнең тәмәке тартыуы менән баланың холҡо араһында айырылғыһыҙ бәйләнеш була. Әсә ҡарынында ятҡанда уҡ организмы никотин йоғонтоһона дусар булған балалар тыңлауһыҙ һәм ярһыу була.*



ИНТЕРНЕТТАН

## ИҢ ЗАРАРЛЫ ҺАУА... тоннелдә

● Йәшел сәйҙе шәкәр һәм лимон менән эсергә кәрәк, тип кәңәш итә Америка ғалимдары. Аскорбин кислотаһы һәм сахароза йәшел сәйҙә булған катехиндың яҡшыраҡ үҙләштерелеүенә булышлыҡ итә. Полифенолдың бер төрө булған был матдә үҙ сиратында йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ыңғай тәьсир итә.

● Канаданың төрлө университеттары ғалимдары көртмәле һутын антиэйдж продукттар исемлегенә индергән. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән лаборатор тикшеренеүҙәр барышында көртмәле һутының ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеүе һәм туҡымаларҙың инсулинға тәьсирен көсәйтеүе асыҡланған. Был һутты 3 көн дауамында ҡабул иткән ҡомаҡтарҙың ҡандарында глюкоза күләме 35 процентҡа кәмегән. Тимәк, көртмәле һуты күп кешеләрҙә шәкәр диабеты һәм артыҡ ауырлыҡты булдырмауҙа ярҙам итәсәк.

● Квинсленд технологик университетының Халыҡ-ара һауа һәм һаулыҡ сифаты лабораторияһы хеҙмәткәрҙәре тоннель - һәр мегаполиста иң хәүефле урын тип раҫлай. Тикшереү барышында улар Сиднейҙ тоннеленең һауаһындағы ваҡ өлөшсәләрҙе тикшереү өсөн 4 километрлыҡ ер аҫты автострадаһы буйлап 300 тапҡыр машина менән үткән һәм зарарлы матдәләр һәм ваҡ өлөшсәләр тупланышы ҡайһы бер урындарҙа ҡабул ителгән нормаларҙан ун, хатта мең тапҡырға артыҡ булыуын асыҡлаған. "Бындай һауаны һыларға ярамай, ул водителдәргә генә түгел, ә пассажирҙарҙың һаулығына ла кире йоғонто яһай", - тип белдерә ғалимдар һәм тоннель аша үткәндә тәҙрәләрҙе ябырға, вентиляция системаһын рециркуляция режимына күсерергә кәңәш итә. Ғалимдар фекеренсә, бындай тоннелдәр сифатлы һауа таҙартыусы система менән йыһазландырылырға тейеш.

● Австралия ғалимдары белдереүенсә, яңы сабылған үлән еҫе психотерапевтик тәьсиргә эйә. Улар яңы ғына сабылған үләндә миндалина һәм мейенең хистәр барлыҡҡа килеү һәм стресс ситуацияларында үҙенде тотоу өсөн яуап биргән бүлексәләренә йоғонто яһаусы матдәләр тапҡан. Был хуш еҫтең кеше тынысланаһәм уның кәйефе яҡшыра. Ғалимдар ошо тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса яңы һауа сафландырыусы сара уйлап тапҡан. Тиҙҙән Великобританияла уның бер баллонын яҡынса 200 һумға һатып алып буласаҡ.

● Йоҡлауҙың иң мөһим маҡсаты булып энергияны һаҡлау, ваҡытты һәм көстө дөрөҫ ҡулланыу тора, тип белдерә Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимы Джером Сигель. Баҡтиһәң, йоҡлаған саҡта организмдың иң күп энергия тотоноусы ағзалары һүнеп тора икән. Мәҫәлән, мейе дөйөм көүҙә массаһының 2 процентын ғына алып тора, әммә 20 процент энергия тотона. Шуға ла организмға көнөнә 6 тапҡыр туҡлыҡлы итеп ашағансы, уны 8-10 сәғәткә һүндереп тороу күпкә файҙалыраҡ. Ә ҡышҡыһын йоҡоға талыусы йәнлектәр һаҡлап ҡалған энергия уларға йылыраҡ яҡтарға барып етергә лә етә, имеш.

● Америка селекционерҙары төшһөҙ мандарин үҫтергән. DaisySL ("Төшһөҙ Дейзи") тип аталған был емеш яҡынса 135 грамм тарта һәм 43 процент тирәһе һуттан тора. Был үҙенсәлекле емеште сығарыу өсөн белгестәргә 8 йыл ваҡыт кәрәк булған. Улар фекеренсә, төшһөҙ мандариндарҙы балалар һәм тештәре ауыртҡан кешеләр ҡурҡмайынса ашай аласаҡ.

БЕЛЕП ҠУЙ!

# КҮПМЕ ЙОҠЛАУ ТҮГЕЛ,

## ә нисек йоҡлау мөһим

**Ғүмеребеҙҙең өстән бер өлөшөн йоҡлап үткәрәбеҙ. Һәр төн үткән айырым бер тормош тәьҫораттары менән тулы була. Был тормош бөтөн төрлө ҡанундар буйынса бара. Улар өҫтөнән РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Сомнологик үҙәге ғалимдары ентекле тикшереү алып бара. Йоҡоһоҙлоҡ, төн уртаһында уяныуҙар һәм иртәнсәк ауыр тороу кеүек проблемаларға бәйле һорауҙарға яуап табыр өсөн был дауалау йортоноң материалдары менән файҙаландыҡ.**

Төрлө категория кешеләр була: аҙ йоҡлаусылар һәм оҙаҡ йоҡлаусылар. Һәр береһенең үҙ өҫтөнлөктәре һәм кәмселектәре бар. Был кешеләр һабантурғай һәм өкө кеүек, бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған, әйткәндәй, уларҙы, ғәҙәттә, был ҡош исемдәре менән атап йөрөтәләр. Кешеләрҙең һәр кемдең эш талаптарына ярашлы хронотип төҙөү мөмкинлеге булғанда, "өкө"ләр көндөң икенсе яртыһында, ә "һабантурғай"ҙар таңғы генәндә тыныс ҡына хеҙмәт итер, һәм, әлбиттә, тегеләрҙең дә, быларҙың да эш һөҙөмтәһе күпкә юғарыраҡ булыр ине. Бәхеткә ҡүрә, бындай асыҡ сағылған "канатлылар" бары тик 15 процент ҡына. Ҡалғандары бик күп факторҙарға, шул иҫәптән, кеше үҙе алып барған тормош стиленә бәйле күсмә хронотипҡа эйә. Йоҡоноң төп тәғәйенләнеше - организмды һаҡлау. Бер нисә тәүлек буйы керпек тә ҡаҡмаған кеше психик тәшенкәлөккә бирелә башлай. Йоҡо психика өсөн генә файҙалы түгел. Сомнологик үҙәктә юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусы кешеләрҙе күҙәткәндәр. Уларға гипертонияға ҡаршы бер ниндәй ҙә сара күрмәй, йоҡо дауаһы биргәндәр. Һәм ун көн эсендә уларҙың барыһының да ҡан баҫымы көйләнгән!

Беҙ йоҡоһоҙлоҡҡа зарланған саҡта, асылда, хаҡлы түгелбеҙ, сөнки проблема йоҡлай алмауҙа түгел, ә уның сифатында. Сәләмәт кеше башта еңелсә генә ойоп китә лә, унан һуң әкрен генә тәрән йоҡоға сума. Сәғәт-сәғәт ярым ваҡыттан ул тиҙ йоҡо менән алмашына. Шулай төн эсендә 4-6 ошондай циклдар әйләнеп тора. Уларҙың һәр береһе 90-120 минут дауам итә. Йоҡолары боҙолған кешеләрҙең был схема, ҡағиҙә булараҡ, көндәҙ кисерелгән көсөргәнешле хәлдәр йоғонтоһонда үҙгәрә. Кеше оҙаҡ һәм яфаланып йоҡлап китә һәм, ниһайәт, ныҡлап йоҡлай башлағанда ғына яңынан йоҡоһо оса. Иртәнгә ул үҙен керпек тә ҡаҡманым, тип иҫәпләй. Үҙен ҡыйралған кеүек тоя, тотош тәртибе үҙгәрә һәм тормошта мөһим булған хәлдәр боҙола. Был тороштоң махсус термины бар - йоҡо агнозияһы, йәғни уны аңламау, боҙоп үҙгәртеп ҡабул итеү. Һәр икенсе кеше тиерлек насар йоҡоға зарлана, әммә бары тик һәр бишенсе кеше генә махсус дауалауға мохтаж. Барыһынан элек, ҡарттар тураһында һүҙ. Депрессия, яңғыҙлыҡ (әгәр ҙә өлкән йәштәге кеше яңғыҙ йәшәй икән) нормаль йоҡоно күп фазаларға әүерелдерә. Был уларҙа көнөнә бер нисә тапҡыр йоҡлап алған бәләкәй балаларҙыҡы кеүек була. Әгәр ҙә башҡа төрлө хәүефле билдәләр юҡ икән, борсолорға сәбәп юҡ. Бары тик йоҡо һинең менән бергә ҡартайған. Төндә эшләргә яраҡҡан ижад кешеләре йәки төн уртаһына тиклем китап уҡырға яратыусылар нисек итеп йоҡоно көйгә һалырға, тип кәңәш һорай. Кәңәш бер - бер үк ваҡытта йоҡларға ятырға һәм кисен-де көсөргәнешле аҡыл эше менән ауырайтмаҫҡа. Әгәр ҙә инде йоҡо боҙолоуы бер нисә аҙна буйы яфалай икән, табибҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ҡайһы берәүҙәр, иң яҡшы йоҡо төнгә ун икегә тиклем, тип һанай. Был дөрөҫ түгел. Бында кешенең ҡасан ятыуына ҡарамаҫтан, тәүге йоҡо, беренсе ике сәғәт мөһим роль уйнай. Ә кеше күпме йоҡларға тейеш һуң? Билдәле немец профессоры Эккарт Рютер, бер ниндәй ҙә йоҡо нормаһы юҡ, тип иҫәпләй. Кеше үҙенә күпме йоҡо кәрәк, тип иҫәпләй, шул тиклем йоҡларға тейеш. Мәҫәлән, Наполеонға дүрт-биш сәғәт йоҡлап алыу еткән. Эйнштейнға ун ике йәки хатта унан күберәк ваҡыт кәрәк булған. Иң мөһиме, һәр кем үҙе өсөн йоҡо нормаһын билдәләп алырға һәм уны үҙгәртмәҫкә тейеш. Профессор Эккарт Рютер тиҙ һәм яҡшы итеп йоҡлап китеү өсөн тынысланырға һәм мөмкин булған тиклем ҡуҙғытмай торған әйберҙәр тураһында уйларға кәрәк, тип иҫәпләй.

Кешеләр шул тиклем үҙ проблемаларына һәм конфликттарына сумған, түшәктә ятҡанда ла шулар тураһында уйлап, йоҡоларын осора. Әммә йоҡоһоҙлоҡтоң органик сирҙәргә бәйле башҡа төрлө сәбәптәре бар. Был төн тартышыу, шулай уҡ ваҡыт поясы үҙгәргән ваҡытта тәүлек ритмының боҙолоуы булыуы мөмкин. Йыш ҡына тын алыуҙың ҡыҫҡа ваҡытҡа боҙолоуы осрай.

**Шулай итеп...**

**Профессор Эккарт кәңәше: "Йоҡоһоҙлоҡ менән көрәшеү өсөн ошондай ҡағиҙәне күҙәтергә кәрәк: көн һайын бер үк ваҡытта йоҡларға ятырға. Хатта йоҡоң туймағанда ла иртәнсәк иртәрәк торорға. Көндөҙ йоҡламаҫҡа. Йоҡо бүлмәһен бөхтә итеп йыһазландырырға һәм унда тауышы ныҡ шылтыраған будильникты ҡуймаҫҡа. Төнгә ҡарай еңелсә генә ашарға, киске биштән һуң бер ниндәй ҙә ҡәһүә йәки кола эсмәҫкә! Йоҡо алдынан физик әүҙемлек күрһәтмәҫкә. Һәм, иң мөһиме, йоҡлай алмай ҡуйыуҙан ҡурҡмаҫҡа. Йоҡо минең дошманым түгел, киреһенсә, минең яҡшы дуҫым, тип үҙеңде ышандырырға. Йоҡоға "һин" тип өндәш, шул саҡта ул һинең менән дуҫлашыр!"**

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

## ТАРТҠАН ҠАТЫН-ҠЫҘ... енәйәтсе тыуҙыра

Йәш әсәне бер ҡарауға ябай ғынаны ла аңламаған баланың тыңлауһыҙлығы сығырынан сығарырға мөмкин. Ундай балаға әсәһенең асыулы ҡыҫҡырыуы ла барып етмәй. Шунан иларға тотона, ә әсә кеше, сабыйын тәрбиәләү килеп сыҡмауын күреп, тынысһыҙланып, тәмәке тартырға тотона, шулай итеп, ул үҙенә элекке көсөн һәм тынысһыҙлығын ҡайтара.

Күп ҡатындар йөклө ваҡытта тартыуҙың зарарлы булыуын яҡшы белә, шуға ҡарамаҫтан, бала тыуғансы тәмәке төтөнөн һурыуын дауам итә. Бороноғолар, ғәҙәт - ул икенсе холоҡ, тип әйткән. Никотиндың баланың сәләмәтлегенә әсә ҡарынында ятҡанда уҡ кендек бауы аша кире йоғонто яһауын һәр кем белә, бынан тыш, белгестәр әсәнең тәмәке тартыуы менән баланың холҡо араһында айырылғыһыҙ бәйләнеш булыуын да асыҡлаған. Тикшеренеүселәр әсә ҡарынында ятҡанда уҡ организмы никотин йоғонтоһона дусар булған балалар тыңлауһыҙ һәм ярһыу була, тиған ҡарарға килгән. Әлбиттә, бөтә сабыйҙар ҙа тиерлек ике йәшлек саҡта шуҡ була, әммә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йөклө ваҡытта тәмәке тарҡан әсәләрҙең "каншыҙ бала" тыуҙырыу ҡурҡынысы дүрт тапҡырға юғары. Ә был проблеманың тамыры тап шул никотиндың химик тәьсир итеүенә ҡайтып ҡала. Йөҙгә яҡын балала тикшереү уҙғарған һәм уларҙың әсәләренән һорау алған доктор Алан Лешнер никотин ҡан аша мейегә килеүсе кислородты кәметә, ә был, үҙ сиратында, бәләкәстең холоҡ проблемаларына алып килә, тип иҫәпләгән.

Юдифь Брук етәкселегендәге Нью-Йорк тикшеренеүселәре, бындай проблема баланы күпкә өлкәнерәк йәштә эҙәрлекләүе ихтималлығын асыҡлаған, йәғни тәмәке тартыу яңы тыуған сабыйҙа (тән ауырлығын кәметә һәм үҫеште туктата) йәки бәләкәстә (тыңлауһыҙ булыуы) генә сағылып ҡалмай, үсмер холҡонда ла криминаль һыҙаттар барлыҡҡа килтереүгә булышлыҡ итә. Ҡыҙыу, тыңлауһыҙ, урамдың насар йоғонтоһона эләккән улды тәрбиәләүҙәге тормош ауырлыҡтары, әлбиттә, әсә кешене ваҡытынан алда ҡартайта. Әммә был никотиндың ҡатын-ҡыҙ матурлығының ваҡытынан алда юғалыуына сәбәпсе булған берҙән-бер "бүләге" түгел.

Нагойа ҡалаһы университетының япон ғалимдары тикшеренеү һөҙөмтәһе тәмәке тартыуҙың тире ҡартайыуын тиҙләтеүгә һәм йыйырсыҡтар һанын арттырыуға булышлыҡ итеүе тураһында раҫлай. Тәмәке төтөнө составына ингән матдә сәләмәт тиренең төп компоненты булып торған коллагенды емереүсе ферменттар синтезын арттыра. Эксперимент барышында тире күҙәнәктәре һалынған физиологик иретмәнең тәмәке төтөнө менән тулыланыуы һәм шуның һөҙөмтәһендә коллагенды емереүсе ферменттар әүҙемлеге артыуы күҙәтелгән. Бынан тыш, яңы коллаген епсәләренең синтезы яҡынса 40 процентҡа кәмегән. Тикшереү етәксеһе Акимиха Морита һүҙҙәренсә, был факторҙарҙың ярашыуы тәмәке тартыусыларҙың тиреһен ваҡытынан алда ҡартайыуға алып килә. Шулай уҡ ул ҡартайыу интенсивлығы тартылған тәмәке һанына бәйле булыуын да әйтеп үтте.

ТӘҮБӘ



# МИН ӘСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 13-сө һабаҡ: "Сирме, ауырыумы?"

Эскелек - сирме, әллә ауырыумы? Баш ауырығанда - ауырыу, оҙаҡҡа китһә - сир, тип әйтер берәү. Был һорауға яуап бирер алдынан тәүҙә сир менән ауырыу төшөнсәләренә аңлатма биреп китергә кәрәктер. Ысынлап та, көнитмешебеҙҙә йыш ҡабатларға мәжбүр булған ошо ике һүҙҙең мәғәнәһе, төп асылы нимәгә ҡайтып ҡала һуң?

Әйтергә кәрәк, беҙ күп осраҡта сир һәм ауырыу һүҙҙәрен бутайбыҙ, йәғни береһенең урынына икенсеһен әйтеп, яңылышабыҙ шикелле. Һүҙҙәрҙе бутау уларҙың төшөнсә буларак мәғәнәләрен аңлап бөтмәүҙән килеп сыға. Миненсә, сирҙең мәғәнәһе, уның асылы киүек үк, тәрәнерәк. Юҡҡа ғына "Сирен йәшергән үлгән" тимәйҙәр. Медицина тел-ләғәте менән аңлатһаҡ, сир - ул хроник ауырыу, йәғни кешене оҙайлы йылдар, ҡайһы саҡ ғүмер буйы яфалаған михнәт. Сир кешенең ҡанында һаҡланып, булмышына күсәләр ул.

Ә ауырыуға килгәндә, әйтәйек, киҙеү, миҙгел-миҙгел булып, үтеп китә торған ыҙа, әммә сир киүек михнәт түгел. Сир һүҙе ҡәтғи яңғырай, тимәк, ниндәйҙер ауырыу кисергән кеше: "Мин сирләйем", - тип әйтә икән, ул үҙенең түбәнгә аңына сирҙе һалып ҡуя, үҙе лә ошо һүҙ энергетикаһына бирелә, һәҙәмтәлә, ысынлап та, сирләй башлай.

Араҡы эскән, хатта унда-бында, байрам уңайынан ғына булһа ла, йөҙәр грамм төшөргән кеше үҙенең оло сиргә тарығанын беләме икән? Ай-һай, белмәйҙер. Сөнки ул ниндәй ваҡыт арауығында һәм күпме эсеүгә ҡарамаҫтан, барыбер сиргә тарый. Хатта үҙ ғүмерендә бер тапҡыр йөҙ грамм ғына эскән кеше лә - сирле. Тағы ла, ҡасандыр эсеп, 12 йыл буйы бер тамсы ла ауыҙына алмаған кеше - шул уҡ эскесе, ҡатыраҡ итеп әйтһәк - алкоголик. Сөнки ҡандың алкоголь тәьҫиренән тулыһынса ҡотолоу ваҡыты 13 йыл. Был һанды мин уйлап сығарманым, тәжрибәле наркологтың дәлилдәрен генә килтерәм.

Әйткәндәрем ышандырырлыҡ булһын өсөн шундай сағыштырыуҙар килтерәйек. Әйтәйек, ҡош ояһын күҙ алдына баҫтырайыҡ әле. Яҙ еткәс, оя эсендәге йоморткаларҙы туҡ-туҡ ярып, себештәр, бәләкәй ҡошсоҡтар донъяға ярала. Инә һәм ата ҡош балаларына ашарға ташып өлгөртә алмай мәж килә. Шуныһы ҡыҙыҡ: ҡошсоҡтарҙың суҡыштары һәр саҡ икегә айырылған була, ауыҙҙары ябылмай тиерлек, үҙҙәре бер туҡтауһыҙ ашарға таптырып сырылдай. Улар өсөн ата-әсәһе эй өҙгөләнә: ергә төшә, селәүсен-бөжәктәрҙе эләктерә һалып, ояға осоп менә. Береһенә ҡаптырыуы була, башҡалары алдағынан да сағыуыраҡ итеп сырылдай, йәнә лә ашарға таптыра башлай. Хәйер, был күренеш барыбыҙға ла таныш. Был хәл көнө буйына дауам итә. Ҡошсоҡтарын туйҙырам тип ата-әсәһенең "сәсе ағара".

Беҙ алда һөйләгән хәлдәргә был ҡошсоҡтарҙың ниндәй ҡыҫылышы бар һуң, тиһегеҙме? Бар шул.

Баҡтиһәң, беҙ ҡабул иткән барлыҡ ризыҡтарҙың да ашҡаҙанда уларҙы эшкәртә торған һуты, аш һеңдергес ферменты була икән. Тик спиртлы эсемлектәр генә бында саҡырылмаған ҡунаҡ, йәғни уны был йортҡа әйҙүкләп торо-усы юҡ. Шуға күрә лә, беҙ əҙ генә эсһәк тә, шарап градусының быуы еңелсә генә башҡа сыҡҡаның тоябыҙ. Нисек башҡа сыға икән ул, тиһегеҙме? Ашҡаҙанда ҡәҙер-хөрмәт күрә алмаған шарап үсегеп, баур аша ҡанға сыға ла китә икән ул. Үәт әй!

Етмәһә, спиртлы эсемлектәрҙе эшкәртеү өсөн ҡан "һауыттарында" һәм юлдарында махсус "автоном ферменттар" барлыҡҡа килә. Ана шул ферменттар инде, әлеге лә баяғы, астан-ас ҡошсоҡ балалары. Ҡош балалары, исмаһам, үсеп етеп, ҡанат нығытҡас, ризыҡ эҙләп үҙҙәре осоп китә, артабан ата-әсәһен ыҙалатмай. Уларҙан айырмалы, фермент-ҡошсоҡтар ғүмер баҡый кеше елкәһендә йәшәргә өйрәнгән "әрәмтамаҡтар". Улар мәңге туя белмәй торған "бирәнҡорһаҡ". Кеше ни тиклем күберәк һәм йышыраҡ эскән һайын, шул тиклем ҡатыраҡ асыға һәм үҙҙәре "ашаған һайын", һандары ла меңәрләп-миллионлап арта бара. Бына һиңә кәрәкһә!

Беҙ, бигерәк тә иртәнсәк, эске килеү теләгенә ҡаршы тора алмайбыҙ. Ә нимә һәм нисек була һуң эске килеү теләге? Әйтер инем, ана шул ҡошсоҡ-ферменттарҙың "ашарға таптырып" сырылдауы, йәғни баш мейеһенә ебәргән SOS сигналдары икән дә. Һе, кисә үлгән булһам, бөгөн белмәгән булыр инем, тиһеңме?

Мин дә ҡасандыр быларҙың береһен дә белмәй инем, иртәнсәк рәхәтләнеп баш төҙәттем, ҡошсоҡтарға ем һибеп, ваҡытлыса тынысландырҙым, тик иртәгеһен "себештәрем" тағы ла артты, тағы ла тынысландырҙым, тик улар күп булғас, "емде" лә мулыраҡ һибергә тура килде. Әммә баш мейем тауыҡ кетәгенә әүерелеп барған саҡта ҡапыл һиҫкәнеп киттем һәм йөрәгемдең тибешен тыңларға булдым. Дөрөҫөрәге, уның тигеҙһеҙ тибеше бер аҙға туҡталыуымды, ҡолаҡ һалыуымды талап итте. Әммә йөрәгемдең тауышын ҡан тамырҙарымды, булмышымды яулап алған ҡошсоҡ-ферменттарҙың "оркестры" шауы күмгәйне. Хатта теге ашарға таптырыусылар баш мейемде үтеп, ҡолаҡ төбөмдә саң ҡағалар.

Шуның өсөн дә эсеүҙе ташлағандың тәүге көндәре, айҙары, йылы бик ауырға тура килде. Бер уйлағанда, хатта ашарға таптырып туҡтауһыҙ илаған сабыйыңа боролоп та ҡарамаған әсә киүек тә тояһың үҙеңде. Уларҙың хәлен уйлап, ашарға бир, әммә биргән һайын улар тағы ла күберәк таптыра.

Эсеүҙән туҡталһаң, ферментҡошсоҡтар ҡайҙа була, ни эшләй, тиһегеҙме? Был һорауға ҡаршы һорау: кеше оҙаҡ ашамай торһа, ни өсөн йөҙө һурыла, ябыға? Сөнки ашҡаҙан тәнгә быға тиклем йыйылған һәм быуындарға ултырған артыҡ майҙы, бер һүҙ менән әйткәндә, "балласты" һурып алып, эшкәртә башлай. Шуның киүек, сигнал ебәреп, туҡтауһыҙ сырылдап төңөлгән ҡошсоҡ-ферменттар, ахыр сиктә, бер-береһен ашай башлай. Уларҙың иң һуңынан ҡалған икәүһе, кеше эсеүен ташлағандан тәүәл 13 йыл тулыуға, бер-береһен ашап һәләк була. Айыҡ тормош хаҡына, ҡандан ҡошсоҡферменттарҙы ҡыуып сығарыу өсөн барған "Бөйөк Ватан һуғышы" ана шулай тамамлана.

Йә, хәҙер кемегеҙ, эскелекте сир түгел тип, әйтә алыр? Сирҙең дә ниндәйе бит әле - аҡсаға һатып алынғаны. Әле минең дә эсеүемдән ҡотолоуыма 13 йыл ваҡыт үтмәгән. 11 йылдан ашыу. Тимәк, мин һаман да эскесе булып иҫәпләнәм. Ниндәй оят һәм ҡурҡыныс!

Тик үҙ-үҙең менән көрәшеп, үҙеңде еңгәндә генә был сирҙән арынырға була. Икенсе төрлө әйткәндә, эскелеккә ҡаршы көрәш, ул иң беренсе нәүбәттә, ҡан менән аң һуғышы. Ҡан талап иткәндә аң менән еңеүе еңел түгел, әммә иң еңел ысулы ла бар бының. Ул да булһа, тыуғандан алып бөтөнләй эсмәү.

Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең иртәнсәк баштары ауыртыуына еңел генә ҡарай, йөҙ грамм ғына эсәм дә, барыһы ла үтәсәк, тип үҙ-үҙен ышандыра, дөрөҫөн әйткәндә, алдай. Шул сағында микроскоп аша уға үҙенең ҡан тамырҙарында нимәләр булғанын күрһәтергә ине һәм эскелеккә ҡаршы шунан да яҡшыраҡ сара ҡалмаҫ ине. Күҙ алдына килтерегеҙ, араҡы-шараптың шойҡаны ҡан тамырҙарына килеп инә, ундағы миллион ҡошсоҡ-ферменттар рәхәтләнеп "туй" үткәрә лә, таҡтан йоп була. Бер аҙҙан һуң уларҙан тағы ла шунсама "себеш" ярала. Артабан инде ике миллион әрәмтамаҡ ашарға таптыра башлай, "бәпес туйы" үткәрергә рәт талап итә.

Хәҙер фәнни-техник революция заманы, бәлки, быларҙың барыһын да кешеләргә күрһәтеү мөмкин булған көндәр ҙә килер. Әлегә шуны ғына белегеҙ: һеҙ рюмкаға үрелгән саҡта, ҡан тамырҙарығыҙҙағы суҡыштарын асып сырылдашҡан себештәрҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Бәлки, уларҙың берәһен ашар ваҡыты килеп еткәндер?

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## "Иҫәрҙәр йәшниге"нең ҡоло булма

**Ҡасан да булһа һинең, хатта ҡырҡмаһа-ҡырҡ эшең тулып ятҡанда ла, ниндәйҙер яраҡтан телевизион программаһы тотҡонлогонан ҡотола алмайынса, үҙеңде әсирлектә ултырғандай тойғаның булманымы? Ҡайһы саҡта сираттағы сериал геройын күршеңә ҡарағанда ла яҡшыраҡ беләһең киүек тойолоп китә, шулаймы?**

Әгәр ҙә был һорауҙарға ыңғай яуап бирәһең икән, тимәк, һин "диван-чипсы" синдромы менән ауырыйһың. Һәр ваҡыт ялҡауланып, нимәләр көйшәп, йәйелеп ултырған телевизор ҡараусы образынан килеп сыҡҡан был шаян неологизм хәҙерге заман теленаркоманын дөпдөрөҫ итеп һүрәтләй. "Диван-чипсы" синдромын бөтөндәрҙә күреү еңел булһа ла, уның диагнозын үҙеңдә билдәләү ауырға тура килә. Ғәҙәттә, был сирҙе табышырға дуҫтар ярҙам итә. Дуҫтарың йәки өйҙәгеләрең һинең улар менән һөйләшергә ваҡыт таппауыңа ризаһыҙлыҡ белдерә башлағас ҡына һин үҙеңдең был сирҙең ҡорбанына әүерелеүеңде һиҙемләйһең. Ә инде улар һинең менән бөтөнләй һөйләшмәҫ булһа, һинән йыраҡлашһа йәки һинең менән араларын өҙөргә ҡарар итһә, ысын мәғәнәһендә, был сиргә дусар булыуыңа ышаныуҙан башҡа сара ҡалмай.

Телевизорҙы "иҫәрҙәр йәшниге" тип атап йөрөтәләр. Уның ни өсөн бындай ироник исемгә лайыҡ булыуы тураһында беҙгә әллә ни баш ватырға ла кәрәкмәй. Заманса төҙөлгән йорттарҙағы ҡунаҡ бүлмәләренә күҙ һалһаң, унда аңһыҙ рәүештә телевизор экрандарына текәлеп ултырыусы балаларҙы, үсмерҙәрҙе һәм өлкәндәрҙе күрерһең. Футбол матчтары, музыкаль тапшырыуҙар, мәғәнәһеҙ фильмдар, яңылыҡтар программаһы, йәнһүрәттәр һәм башҡа бик күп төрлө телевизион продукция менән гипнозланған донъялағы барса кешеләрҙең мейеһе киләһе реклама паузаһына тиклем тотҡонлоҡта була.

Кешеләрҙе йәшниккә ҡаратып ултыртыусы "диван-чипсы" синдромы уларҙа пассивлыҡ тыуҙыра. Үҙеңдең потенциаль мөмкинлектәреңде ғаиләң йәки дуҫтарың менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу, йәки эштән буш ваҡытыңды файҙаға үткәреү урынына, кеше кире ҡайтарып булмаҫтай алтынға тиң ваҡытын бушҡа уҙғара. Телевизион күнел асыуҙар бер аҙға ғына стрестан арынырға ярҙам итһә лә, шуның менән бергә кеше организмына тәрән эске үҙгәрештәр алып килә. Был һәр кемдә булған бөйөк һәләтте асырға ҡамасаулай.

Даими рәүештә телевизор ҡараған кешеләр тора-бара экранда барған әйберҙе пассив ҡүҙәтә башлай. Шуның һөҙөмтәһендә уларҙа тормоштағы ваҡиғаларға ла һүлпән ҡарау тенденцияһы барлыҡҡа килә. Уларға телевизор экранынан ситтә барған бөтә нәмә лә шул тиклем ҡатмарлы һәм йонсотҡос киүек тойола башлай. Хәҙерге педагогтар телевидениеның студенттарға нисек йоғонто яһауын яҡшы белә. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре киләсәктә китап уҡыу сығанағы булараҡ ҡулланыуҙан төшөп ҡаласаҡ, сөнки китап уҡыу уҡыусыларҙан күп көс талап итәсәк, тип фаразлай. Бында эш ялҡаулыҡта ғына ла түгел. Ғалимдар оҙайлы ваҡытҡа телевизор ҡарарға ултыртып ҡуйған кешеләрҙең мейе структураһындағы физик үҙгәрештәрҙе асыҡлаған. Был үҙгәрештәр, баҡтиһәң, оҙайлы ваҡыт дауамында иғтибарҙы китап уҡыуға йүнәлтеүҙе ауырлаштыра икән.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ОШО ЕРҘӘ ТҮЛ ЙӘЙГӘН...

## башҡорт ҡәүеме

**Һеҙгә Бөрйән районы Байназар урта мәктәбе уҡыусылары һәм уҡытыусылары мөрәжәғәт итә, сәләм ебәрә, иҫәнлек-һаулыҡ теләп ҡала. Ил хәстәрен иңгә һалып, тәрән йөкмәткеле гәзит ижад итеүселәргә йөрәктән сыҡҡан рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ижади ҡомарығыҙ шулай һәр саҡ юғары кимәлдә булыр тигән ышаныста ҡалабыҙ. Шуға ла "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсына фекеребеҙҙе "Киске Өфө" аша белдерергә булдыҡ.**

Башҡорт иленең мөғжизәгә дәғүә итмәҫ берәй төбәге бармы икән? Бөтә уңайлыҡтары булған таш өйҙәренән ҡасып, турист гиҙмәгән ерҙәребеҙ бар микән? Ә шулай ҙа мөғжизәләрҙең дә мөғжизәһе ул - "Шүлгәнташ". Ошонда тәү әсәбеҙ Йәнбикә менән тәү атабыҙ Йәнбирҙе көн иткән. Уралтауыбыҙға исем биргән ил улы Урал батыр тыуған. Ошонда иң юғары әхлаҡи ҡанундар бәйәне - "Урал батыр" эпосы ижад ителгән. Ошо ерҙән затына йән өрөлөп, башҡорт ҡәүеме түл йәйгән.

Ҡөрьәндә әйтелеүенсә, Ерҙә бер ҡәүем дә Бәйғәмбәр ебәрелмәйенсә, йәшәү ҡануны күндерелмәйенсә яратылмаған. Риүәйәттәр буйынса, Урал батырыбыҙ ҙа бәйғәмбәр булған. "Урал батыр" эпосы ла Хоҙайҙан бирелмеш йәшәү ҡануны булыуы бик мөмкин. Унда бынан 300 млн (!) йыл элекке ваҡиғалар һүрәтләнә:

- беҙҙең төбәк диңгеҙ аҫтында булып, унда Уралтау яһалғаны;
- аҙаҡ диңгеҙ сигенеп, айырым күлдәр хасил булғаны (пермь дәүере);
- дейеүҙәр (динозаврҙар) йәшәгән дәүер;
- кешеләрҙең әле атты белмәгәне, ә арыҫлан менән йөрөгәне һәм башҡалар.

Эпос ябай тел менән генә донъяуи мәсьәләләрҙе иң юғары әхлаҡи бейеклектәргә күтәрә. Ундағы һәр һүҙ бала аңына әсә һөтө менән үк һеңдереү ҡеүәтенә эйә. Донъя мөғжизәләре исеменә лайыҡ "Урал батыр" эпосы нисек Башҡортостан мөғжизәһенә инмәһен, ти!

Ҡыу ҡурайҙы илатып, нисә тыңлаһаң да тыңлап туйылмаҫ, нисә ишетһәң дә тетрәндермәй ҡалмаҫ, ниндәй халыҡтың да күңел сөңгөлдәрен аҡтармай ҡалмаҫ, бер һүҙһеҙ генә лә ватансылыҡ тойғоһо һалыусы "Урал" йыры ниңә дәғүәселәр исемлегенә инә алманы икән? Беҙҙеңсә, ҡымыҙ түгел, ә "Урал" йыры индерелергә тейеш ине дәғүәселәр исемлегенә.

Тәүтөйәк "Шүлгәнташ", "Урал батыр" эпосы, Уралтау, "Урал" йыры өсөн дәүләт сиктәре юҡ. Ниндәй ҡитға ҡәүемдәрен алма: англо-сакстар, ирландтар, французлар, курдтар, мадьярҙар, тағы бик күптәр тарихи тамырҙарын Уралтауҙа эҙләгән һәм эҙләй. Кемдәре ҡайҙарға һибелмәһен, ни рәүешкә кермәһен, төйәгенә сат йәбешеп, Уралтауына тоғро ҡалыусы - ул башҡорт халҡы. Шиғырҙарында маҡтап-маҡтап, ҡобайырҙарында данлап-данлап туймаған - башҡорт халҡы. Уралтауға йырҙар сығарып та, йырлап та күңеле ҡанмаған башҡорт халҡы. Дошманынан һаҡлап-яҡлап, йән аямай айҡашҡан башҡорт халҡы. Ташҡа баҫмайынса, телдән-телгә тапшырып, "Урал батыр" эпосын ошо көндәргә еткереүсе лә башҡорт халҡы һәм ул үҙе мөғжизә түгелме ни?!

Хөрмәтле милләттәштәр! Үҙ ҡиммәттәребеҙҙең ҡәҙерен үҙебеҙ белмәһәк, Ерҙә йәшәргә, нәҫел дауам итергә хаҡыбыҙ булыр микән? Йәгеҙ, барыбыҙ ҙа бер төптән булып йәнтөйәгебеҙ, тәүтөйәгебеҙ Шүлгәнташ өсөн тауышыбыҙҙы бирәйек. "Урал батыр" эпосыбыҙға тауышыбыҙҙы бирәйек.

**Байназар урта мәктәбе коллективы (барлығы 234 ҡултамға).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

## БАШҠОРТОСТАН ЭСКЕ ЭШТӘР МИНИСТРЛЫҒЫНА - 90 ЙЫЛ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

ТАУЫШ БИР!




Шулай итеп, әйҙәгеҙ, тауыш биреүҙе әүҙемерәк атҡарайыҡ. Тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны -252-39-99, 246-03-24, "Киске Өфө" гәзите сайты - **www.kiskeufa.ru**, шулай уҡ "Сәләм" ижад берекмәһе телефоны -251-73-91, 251-90-44, "Сәләм" ижад берекмәһе сайты - **www.salyam-bst.ru** аша ла атҡарыла.

**34-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Ҡарағалпаҡ. Археоптерикс. Ҡобара. Флокс. Кубок. Ҡарсыға. Округ. Виноград. Шәкәр. Журналист. Донъя. Командир. Күн. Әүен. Дог. Анархист. Бишбармаҡ. Идеал. Туҡталыш. Ҡайын. Екән. Һәйкәл. Картина. Азалия. Кинәйә. Назарат. Лайм. Алйырҙан. Бәрәс. Сылбыр. Йәрәбә. Нәтижә. Аран.

**Вертикаль буйынса:** Краб. Ҡарындаш. Йәйен. Графин. Селлә. Елкә. Үлем. Арҡа. Каштан. Ҡолон. Тәлмәрйен. Арена. Алмас. Аккорд. Ғата. Сәсә. Фтор. Саңғысы. Лава. Психология. Ауыҙ. Словак. Армыт. Нарзан. Оран. Үрғуян. Айлыҡ. Оратор. Тормоз. Хамса. Даһи. Минкор. Ректор. Шәфҡәт.

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ИЖАД МИҘГЕЛЕН...

## ҡурайсылар асасаҡ



**Быйыл Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ижад миҙгелен йылдағына ҡарағанда иртәрәк асырға ниәтләй. Ошо уңайҙан журналистар менән уҙғарылған матбуғат конференцияһында филармония етәкселеге яңы ижад миҙгеле, тамашасыларҙы хеҙмәтләндереү өлкәһендәге яңылыҡтар менән таныштырып үтте.**

Был миҙгелдә, һәр ваҡыттағыса, төп йүнәлеш булараҡ башҡорт, рус, сит ил классикаһын яңғыратыу менән бер рәттән, джаз, блюз жанрындағы программалар тәҡдим ителәсәк. Октябрь айында "Далан" фольклор-эстрада төркөмө "Башҡорт балы" тип исемләнгән концерт программаһы менән сығыш яһай. Уны сәхнәгә филармонияның баш режиссеры Салауат Итбаев ҡуя. Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар Өфө тамашасыһына әр-яңы шоу-программа тәҡдим итә. Уны Санкт-Петербург театр сәнғәте академияһының бишенсе курсында уҡып йөрөүсе буласаҡ режиссер Илшат Фәхертдинов сәхнәгә әҙерләй. Шулай уҡ йәш ижадсы М.Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" әҫәре буйынса балалар өсөн мюзикл өҫтөндә эшләй. Тамаша уҡыусыларҙың яҙғы каникул ваҡытында күрһәтеләсәк. "Каруанһарай", "Йәдкәр" коллективтары ла үҙ тамашасыларын яңыса балҡыш менән ҡаршы алмаҡсы. "Йондоҙҙар парады" тип аталған концерт программаһы менән Нәзифә Ҡадирова, Флүрә Килдейәрова һәм башҡа билдәле артистар республика һәм Рәсәй ҡалалары буйлап турнеға сыҡһа, "Каруанһарай" егеттәре һәм бер төркөм йәш артистар Башҡортостанда Йәштәрҙең инициативаһын яҡлау һәм үҫтереү йылына арналған программа менән гастролдәрҙә йөрөйәсәк. Ноябрь айында иһә республика филармониялары фестивале уҙасаҡ. Күркәм байрамға әүерелгән был ижади марафон тамашасыларҙың күп һанлы һорауы буйынса йыл һайын үткәрелә башлаясаҡ. Филармонияға йәш көстәр ҙә килгән. Уның ижад коллективын Марсель Ҡотоев, Рөстәм Шаһыбалов, Вадим Зәкиев кеүек һәләтле йәш йырсылар тулыландырған.

Тағы ла шул: хәҙер Рәсәй йәки сит ил ҡалаларынан тороп, Башҡорт дәүләт филармонияһы концерттарына Интернет селтәре аша билетка заказ бирергә мөмкин буласаҡ. Учреждение күптән түгел бөтә донъя билет һатыу системаһы менән килешеү төҙөгән. Өфөлә был системаның 12 нөктәһе эшләй.

**Шулай итеп... 26 сентябрҙә Башҡорт дәүләт филармонияһы үҙенең 71-се ижад миҙгелен "Ҡурай-шоу" тип аталған концерт программаһы менән асып ебәрәсәк. Бында ҡурай мөмкинлеге мыҙыҡаның бөтә төр жанр, стиль һәм йүнәлештәрендә күрһәтеләсәк. Башҡорт халҡының мөғжизәле уйын ҡоралына арналған тамашала Азат Айыткөлов, Рәмил Ғәйзуллин, Рәсүл Ҡарабулатов, Роберт Юлдашев, Рушан Биктимеров, Сәғиҙулла Байегет, Азат Биксурин һәм башҡа йәш артистар ҡатнаша.**

**Буранбикә ЙӘНСУРИНА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Ҡышҡылыҡҡа тәмле аджика

300 г кишер менән 3 кг помидорҙы ит турағыс аша үткәреп, 20 минут ҡайнатҡас, бер әсе боросто бөтән көйө һалырға. Ошо массаға ит турағыс аша үткәрелгән 400 г алманы ҡушып, 15 минут ҡайнатырға. Ваҡ итеп туралған 7 татлы борос, 300 г көнбағыш майы, тәмәнә ҡарап тоҙ өҫтәп, 10 минут ҡайнатҡас, иҙелгән 200 г һарымһаҡ, 4-5 бөртөклө ҡара борос ҡушып, тағы 2 минут ҡайнатырға һәм әсе боросто алып ташларға. Стерилләнгән банкаларға тултырып, ҡайнар һыу менән бешекләнгән тимер ҡапҡастар менән ябып ҡуйығыҙ.

### Бәшмәк маринадлау

Бәшмәкте йыйып алып ҡайтҡандан һуң, таҙартып, йыуып, 20 минут ҡайнатып, һөҙөп алығыҙ. Унан һуң бәшмәктәрҙе маринадҡа һалып 8-10 минут ҡайнатырға. Маринадты түбәндәгесә әҙерләргә: 1 л ҡайнаған һыуға 5 г тоҙ, 10 г һеркә, 1-2 лавр япрағы, 8-10 бөртөклө ҡара борос, ҡарағат япрағы, әнис, ярты балғалаҡ шәкәр, йыҡа итеп туралған һарымһаҡ. Бәшмәктәрҙе стерилләнгән банкаларға тултырып, өҫтөнә маринад ҡойоп, ҡапҡас менән ябырға.

### Мөтөрләк бөйөрәктәр

Ҡамыр өсөн: 350 г он, 160 г аҡ май йәки маргарин, 1 йомортҡа, 3-4 г тоҙ.

Эслек өсөн: 200 г һарыҡ ите, 200 г һыйыр ите, 1 һуған, 3-4 теш һарымһаҡ, 1 ус петрушка.

Ҡамырҙы баҫҡас та бер сәғәт тирәһе һыуытҡыста тотоп алырға. Иттәрҙе ит үткәргестән үткәрергә. Һарымһаҡ менән һуғанды турап, майҙа еңелсә генә ҡыҙҙырып, туралған петрушка, ит менән ҡушып болғатып, тоҙ, борос һалып, әҙер ҡамыр түңәрәктәргә һалып, йәбештереп сығырға. Майлы табаға теҙеп, духовкала бешереп алырға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

ИҒЛАН

**18 һәм 25 йәшлек 175, 170 см буйлы ике башҡорт ҡыҙы латин-америка бейеүҙәрен өйрәнеү өсөн партнерҙар эҙләй. Дәрестәр йәкшәмбе көнө 19.00 - 22.00 сәғәткә тиклем, түләү айына 530 һум. Телефоныбыҙ редакцияла.**

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

# КАРТУФ - БАШҠОРТ ҺҮҘЕ

Бер мәл татар зыялылары менән: "Кемдәр тәүҙәрәк картуф үҫтерә башлаған: татарҙармы, башҡорттармы?" - тигән һорауға ижади бәхәсләшеп киттек. Улар беҙгә: "Һеҙҙең хатта үҙ һүҙегеҙ ҙә юҡ, урыҫтарға эйәреп, "картуф" тип әйтәһегеҙ, ә беҙҙеңсә ул "бәрәңге", - тигән дәлил килтергәс, беҙ шымып ҡалдыҡ. Аҙаҡ инде тарихи күҙлектән этимологик уйланыуҙарға биреләйек һәм бөтөнләй башҡа төрлө һығымталарға юлыҡтыҡ. Урыҫтар картуфты, һыуҙың парында бешкәнгә күрә, "паренка" тип атап йөрөткән. Татарҙар һәм башҡорттарҙың ҙур өлөшө бәрәңге тип атаған рисыҡ ошонан алынған да инде. Ә инде "картуф" ҡа килгәндә, "картофель" - немец һүҙе, йәғни "Иблис көсө" тип тәржемә ителә. "Картофель"дың "кар" өлөшө "көс", "тофель" - "Иблис"тигәнде аңлата. Хәҙер инде ошо һүҙҙе башҡорт теле күҙлегенән ҡарайыҡ. Кар - көс булһа, беҙҙеңсә ул "кәр" була. Ә инде "тофель"гә килгәндә, "Иблис"тың синонимдарының береһе "дейеү". "Дейеү"-ҙең урыҫ тамыры "див", немец тамыры "тойф". Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОШМАНЫҢ МЕНӘН БӘХӘСЛӘШ,

## һуңынан уның дуҫҡа әйләнеүе бар

Йәшлек бер тапҡыр ғына бирелә. Һуңынан иһә, ахмаҡлыҡтарҙы аҡлар өсөн икенсе бер сәбәп эҙләргә тура килә.

**(Бадди Эбсен).**

Әгәр ҙә яҡындарыңдың ни тураһында доға ҡылғанын ишетмәгәнһең икән, "Амин!" тип әйтергә ашыҡма.

**(Веслав Малицкий).**

Ҡатын-ҡыҙ башҡалар кеүек кейенергә теләй, ләкин башҡалар кеүек кейенһә, бик ныҡ ғазаплана.

**(Лешек Кумор).**

Шулай ҙа донъя алға бара: хәҙер һуғыш менән яфаламайҙар, ә һуғышһыҙ ғына яфалайҙар.

**(Карел Чапек).**

Бәхәсте дошмандарың араһында алып барыу яҡшыраҡ, сөнки һәр төрлө бәхәстән һуң дуҫың - дошманға, дошманың дуҫыңа әйләнеүе бик мөмкин.

**(Биант).**

Икәү ярашҡан урында өсөнсө ахмаҡ булып ҡала.

**(Кароль Ижиковский).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш кеше суфыйсылыҡ тураһында кире фекер әйтә. Быны ишетеп ҡалған суфый шәйехе йәш кеше эргәһенә килеп, ҡулындағы ташлы балдағын сисә һәм уға биреп, шулай ти: " Йәш кеше, ошо балдаҡты баҙарға алып бар ҙа, алтын хаҡына ҡуйып һат..." Йәш кеше баҙарға барып, был балдаҡты бер алтын тәңкәгә һатырға маташып ҡарай, ләкин уны бәрәү ҙә алмай. Хатта йәш кеше һораған хаҡты ишетеп, ҡайһы берәүҙәр асыуланa һәм уны ҡыуып ебәрә. Йәш кеше шәйех эргәһенә килеп: "Үтмәҫ тауар бирҙең миңә, уның хаҡы һуҡыр бер тин дә тормай", - тип, үҙенең үпкәһен белдерә. "Ә һин алтын менән эшләүсе оҫтаханаға барып, был балдаҡты шундағы оҫтанан баһалатып ҡара әле", - ти шәйех йомшаҡ ҡына. Йәш кеше оҫтахананан бик аптырап килеп инә һәм: " Быңа һинең балдағың, хөрмәтле шәйех, ювелир уны ун алтын тәңкәгә баһаланы", ти. "Быңа, балаҡай, - ти шәйех, - һин дә суфыйҙар тураһында баҙарҙағылар менән балдаҡ тураһында белгән ҡәҙәре генә беләһең..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Динара ЯҠШЫБАЕВА, Таһир ИШКИНИН.

Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4017